ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 июнь (һөтай) 2016

№23 (701)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мәғлүмәт сығанаҡтары ла...**

заман талаптарына эйәрһен



3

**Тормошто тыңла...**

унда файҙалы нәмәләр бик күп



8-9

**Донъя сәнғәтендә...**

беҙҙең дә үҙ урыныбыҙ бар



10

**Йәннәт ҡапҡаларын аскан,**

Йәһәннәм ҡапҡаларын япҡан ай



13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Бишенсе сәбәп. Дөрөҫ уйлау өсөн. Уйҙарыңда суп-сар күп булған һайын, һинең тормошоң артҡа китә, сиргә һабыша бараһың. Ә дөрөҫ уйларға өйрәнеү һине рухи яҡтан да, физик яҡтан да сәләмәтләндерә. Ошо хаҡта иҫкәртә"Киске Өфө". Гәзиттең индексы - 50665, 6 айға яҙылыу хаҡы -574 һум 32 тин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Киләһе уңышҡа ниндәйерәк нигеҙ һалынды?

*Ринат МИҺРАНОВ, "Рәсәй баҡсасылар союзы"ның БР төбәк бүлексәһе рәйесе:* Был ваҡытҡа республикабыҙ баҡсасылары киләһе уңышҡа нигеҙ һалыуҙы күптән тамамланы инде. Шуныһы ҡыуаныслы: республикабыҙҙа баҡсасылар һаны йылдан-йыл арта бара: бөгөнгө көнгә ярты миллиондан ашыу баҡса участкаһы иҫәпләнә. Был нимә хаҡында һөйләй? Ил иҡтисады кисергән ҡатмарлы шарттарҙа Евросоюз тарафынан иғлан ителгән санкциялар аҙыҡ-түлек баҙарында хаҡтар артыуына сәбәпсе булды. Ләкин, асыҡланыуынса, Рәсәй халҡы санкцияларға бирешеп, баҙап ҡалманы. Беҙ тиҙ арала сит ил тауарҙарына бәйлелектән азат булыуыбыҙҙы, импортты алмаштырырырҙай аҙыҡ-түлек баҙары менән үҙ-үҙебеҙҙе тәьмин итә алыуыбыҙҙы күрһәттек. Ауыл хужалығы продукцияһы етештереүсе коллектив һәм фермер хужалыҡтары менән бер рәттән миллионлаған шәхси хужалыҡтар, шулай уҡ баҡсасылар коллективтары ла аҙыҡ-түлек баҙарын тулыландырыуға ҙур өлөш индерә алыу мөмкинлектәрен күрһәтте. Иғтибар итһәгеҙ, Өфө баҙарҙарының сауҙа рәттәрендә шәхси хужалыҡтарҙа һәм баҡсасылар үҙҙәренең ер участкаларында етештергән картуф, кәбеҫтә, һуған, кишер, сөгөлдөр, ҡабаҡ һәм башҡа шундай йәшелсәләр йыл әйләнәһенә һатыуҙа була. Израилдән, йә булмаһа Египеттан килтерелгән йәшелсәгә ҡарағанда, үҙебеҙҙә етештерелгәне мең артыҡ. Хаҡы ла арзаныраҡ. Әлбиттә, уңыш мул булһын өсөн сифатлы орлоҡ кәрәк. Был йәһәттән быйыл баҡсасыларға киләһе уңыш нигеҙен һалыуға "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Уңыш түтәле" акцияһы бик ваҡытлы ярҙамға килде: республика баҡсасыларына бушлай 40 мең дана орлоҡ йыйылмаһы, 1000 комплект сәскә үҫентеләре таратылды.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

## ЙӨҘ МЕҢ ТАМАШАСЫ!

**Үткән аҙнала Өфөлә "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале гөрләп үтте. Биш көн буйына Конгресс-Холл эргәһендәге амфитеатрҙа 11 илдән, Рәсәйҙең 10 төбәгенән һәм, әлбиттә, республикабыҙҙың артистары сығыш яһаны. Был ҙур сараны "Симфоник төн" башлап ебәрҙе, унда классик музыка яңғыраны. 26 майҙа фестиваль "Кино төнө" менән дауам итте, тамашасы иғтибарына башҡорт режиссерҙарының кинолары тәҡдим ителде. "UFA - Kuraifest" проекты - был фестивалдең иң сағыу тамашаларының береһе булды. Был уйын ҡоралын донъя кимәлендә яңғыратып, уға яңыса һулыш өргән виртуоз ҡурайсылар башҡарған заманса эшкәртелгән халыҡ көйҙәрен, классик һәм эстрада-электрон музыканы майҙанға йыйылған 10 меңдән ашыу кеше тыңланы. "Евразия йөрәге" фестивалендә "Башҡорт милли костюмы көнө" лә үҙ майҙанына тотош республиканан әллә күпме халыҡты йыйҙы. Марш-парадта ғына меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Ошо уҡ көндө "Урал моңо" Халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивале еңеүселәрен билдәләне. "Этно төн" билдәле сит ил һәм Рәсәй музыкаль төркөмдәре сығышы менән ҡыҙыҡлы булды. Фестивалдең аҙаҡҡы кисендә иң яҡшы сығыштарҙан Гала-концерт ойошторолдо һәм амфитеатр төрлө милләттәрҙең моңона сорналды. Гәзиттең был һанында ошо саралар хаҡында тулыраҡ уҡый алаһығыҙ.**

## ҮҘЕБЕҘЛЕК

*Ағып ята илебеҙҙә*
*Үҙебеҙҙең иҙелдәр:*
*Ағиҙелдәр, Ҡариҙелдәр*
*Ситтәрҙеке түгелдәр.*
*Күккә ашып баҫып тора -*
*Тауҙарыбыҙ беҙҙеке!*
*Яттарҙыҡы түгел улар -*
*Баштуҡ үҙебеҙҙеке!*
*Үҙебеҙҙең көйҙәребеҙ,*
*Үҙебеҙҙең бейеүҙәр,*
*Үҙебеҙҙең тантаналар,*
*Үҙебеҙҙең кейемдәр!*
*Үҙебеҙҙең ҡурайыбыҙ*
*Рухлы итәлер беҙҙе!*
*Үҙебеҙҙең ҡарыһүҙҙәр*
*Һаҡлайҙыр телебеҙҙе!*
*Үҙебеҙҙең Урал батыр -*
*Үҙебеҙҙең бәйғәмбәр*
*Һөйләй донъя яралмышын,*
*Һалалыр аңға ғәмдәр.*
*Яуызлыҡты, изгелекте*
*Бәйәнләй был тәғлимәт.*
*Башҡортлоҡто йәшәтәлер*
*Үҙебеҙҙең йәмғиәт.*
*Урамдарға һыймай, әйҙә,*
*Үтһен беҙҙең байрамдар!*
*Ҡотло булһын, һай, афарин,*
*Беҙҙең алға алғандар!*

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА.**



12+

✓ *Ошоға тиклем бындай сағыу күңел байрамдарыбыҙҙың тағы береһе - Салауат көндәре ниндәйен дә ҡеүәтле тетрәнеүгә дусар итеп, рухи күтәренкелеккә булышлыҡ итә ине. Үкенескә, быйыл был йәһәттән тауыш-тын юҡ.*



БЫЛ АЙҘА...

# САУАПЛЫ КӨНДӘР ЕТӘ

**Йәйҙең тәүге айы - июнь дә башланып китте. Быйыл айырыуса йәмле, сауаплы, изгелекле булмаҡсы һөтайыбыҙ, сөнки ураҙаға тап килә ул.**

Яҙ менән йәй араһындағы саф йәшеллекте сағылдырыусы тәүге көнөн Балаларҙы яҡлау көнө тип белһәк, шул уҡ ваҡытта 4 июндең дә балалар менән бәйле булыуы асыҡланды - Агрессия ҡорбандары булған **Халыҡ-ара ғәйепһеҙ балалар көнө** ул. Был дата 1982 йылда БМО тарафынан "Израиль агрессияһы ҡорбандары булған Палестина һәм Ливан балалары һанынан тетрәнеү" айҡанлы билдәләнә башлаған. Бына шулай, сыуаҡ көн яҡтыһынан һуғыш һөрөмөнә - бер аҙым. Ер аяғы ер башында түгел, ут күршебеҙҙә һәләкәткә дусар хәҙер балалар. Украина хунтаһының үҙ халҡына ҡаршы енәйәтсел һуғыш алып барыуы арҡаһында Донбасс менән Луганск өлкәләрендә лә әллә күпме бала ғүмере өҙөлдө, ғәрипләнде, өйһөҙ тороп ҡалды, мәктәптәре шартлатылып, уҡыуҙары туҡтаны, әммә был донъя йәмәғәтселегендә бер ниндәй ҙә шаңдау тапманы...

**Бөтөн донъя тирә-яҡ мөхитте һаҡлау көнө** (5) һәр ваҡыт көнүҙәк булып ҡала, сөнки кешелек цивилизацияға табан атлаған һайын, ҡырағайлыҡты ла тыуҙыра, тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Техноген һәләкәттәрҙән кешелекте аяп ҡалыу мәсьәләһе шуға ла иң элек экологтар иңендәге бурыс, тик был турала беҙ Экологтар көнөндә (5) генә иҫкә төшөрмәһәк ине.

12 июнь **- Рәсәй көнө**. Рәсәй Федерацияһы Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителгән көндә, ихтимал, бәғзе берәүҙәр ҡасандыр шундай уҡ декларацияның Башҡортостан Республикаһы тарафынан да ҡабул ителеүе тураһында иҫкә төшөрәлер. "Рәсәй төбәктәре менән көслө" тигән тормошсан лозунг бөгөн айырым бер мәғәнәгә эйә, сөнки ул берҙәмлеккә, бер-береңә ихтирам менән һыйышып йәшәүгә саҡырып тора.

Баш ҡалабыҙ **Өфө көнө**н (12) тап ошо мәлдәрҙә үткәреүҙең бер отошло яғы бар: күҙ яуын алырлыҡ сәскәләргә күмелгән гүзәл сағы уның. Киңлеккә лә, бейеклеккә лә үҫә барып, донъя мегаполистарының береһенә әүерелеп килә баш ҡалабыҙ - быны танымау мөмкин түгел. Бәхетлененең байрамы бер юлы, тигәндәй, Башҡортостан журналистары көнө лә (13) байрамдарҙың ҡыҙған мәленә, республикала һабантуйҙар гөрләгән саҡҡа тап килә. Ошоға тиклем бындай сағыу, күңел байрамдарыбыҙҙың тағы береһе - Салауат көндәре ниндәйен дә ҡеүәтле тетрәнеүгә дусар итеп, күңелдәребеҙҙең таҙарыныуына, рухи күтәренкелеккә булышлыҡ итә ине. Үкенескә, быйыл был йәһәттән тауыш-тын юҡ. Бәлки, уны йыл аша үткәрергә ҡарар иткәндәрҙер?..

22 июнь - **Рәсәйҙә ҡайғы һәм хәтер көнө**. 1941 йылдың тыныс бер ошо йәмле иртәһендә, бар ғаләмдең татлы йоҡоһонда немец фашистары мәкерле рәүештә илебеҙгә баҫып инә. Әле генә, 9 май- Еңеү көнө айҡанлы булып үткән тантаналар күҙ алдынан үтә. "Үлемһеҙ полк" бөтөн халыҡ маршын матәм маршы итеп, тап ошо Хәтер көнөндә үткәреү урынлыраҡтыр ҙа, бәлки, тигән уй йүгерә баштан.

Был ай ахырында бер-береһе менән бәйле тағы ике көн бар. **Халыҡ-ара наркоманияға ҡаршы көрәш көнөнөң** (26) иртәгәһенә **Йәштәр көнөнөң** (27) тура килеүе егет-ҡыҙҙарыбыҙҙы, үҫмерҙәрҙе, балаларҙы заман афәте - наркотиктарҙан аралап алып ҡалыуға, уларҙың сәскә шикелле ғүмерҙәрен аяуға үҙенсәлекле бер ишаралыр ҙа, бәлки?

Июндә тыуғандар:

2 - яҙыусы, З. Биишева исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сауҙа хеҙмәткәре **Хәбир Даутов**ҡа - 80 йәш.

4 - Башҡортостандың халыҡ артисы **Зифа Баязитова**ға - 65 йәш.

26 - яҙыусы, драматург **Азат Абдуллин**ға - 85 йәш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Киләһе уңышка ниндәйерәк нигеҙ һалынды?*

**(Башы 1-се биттә).**

Ғөмүмән, илдә аҙыҡ-түлек баҙарын тулыландырыуға баҡсасылыҡ коллективтарын әүҙем йәлеп итеү мәсьәләһе ныҡлап ҡарала бөгөн. 19 майҙа БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай бинаһында булып үткән тәүге баҡсасылар съезында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов исеменән сығыш яһаған БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары И. Мөхәмәтдинов Башҡортостанда баҡсасылыҡ хәрәкәтен хуплау, уға дәүләт кимәлендә ярҙам ҡулы һуҙыу, атап әйткәндә, шәхси хужалыҡтарҙан артып ҡалған продукцияны һатыуға булышлыҡ итеү, баҡсасылар йәшелсә-емештең сифатлы, районлаштырылған сорттарын һатып алһын өсөн емеш-еләк питомниктары төҙөү, баҡса участкалары хужаларының хоҡуҡи яҡланғанлығын тәьмин итеү һәм башҡа шундай мәсьәләләр ҡаралды һәм 19 май Баҡсасылар көнө тип иғлан ителде.

***Азат ШӘРИПОВ, Баймаҡ район хакимиәте башлығы урынбаҫары:*** Баймаҡ игенселәренең кәйефе һәйбәт: һеҙ әйтмешләй, киләһе уңышҡа ярайһы ныҡлы нигеҙ һалынды. Былтыр сәсеү эштәре ауырыраҡ барғайны, быйыл ғәжәп: барыһы ла ойошҡан, берҙәм рәүештә эшләнеләр, бер кемгә лә әйтеп-төртөп торорға тура килмәне. Һауа торошоноң да ыңғай тороуы игенсе кәйефендә сығылмай ҡалманы, күрәһең. Техника, яғыулыҡ йәһәтенән дә эшкә тотҡарлыҡтар булманы. Һөҙөмтәлә район аграрийҙары иң яуаплы ауыл хужалығы кампанияларының береһе - яҙғы сәсеүҙе тейешле ваҡытта тамамланы. Сәсеү эштәре барлығы 74 мең гектарҙа башҡарылып, шуның 65 162 гектарын - иген, 6 55 гектарын техник культуралар тәшкил итте. Әйтеүемсә, быйыл яҙғы баҫыу эштәре тейешле агротехник сроктарҙа барыуы, аграрийҙарҙың игенселек технологияһына ныҡлы иғтибар бүлеүе менән айырылып торҙо. Сәсеүҙә элиталы орлоҡ, минераль ашламалар, биопрепараттар ҡулланыу үҙ һөҙөмтәләрен бирәсәк.

Сәсеүҙе ойошҡанлы үткәреүгә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамы ла ҙур булыуын билдәләп китер инем. Быйыл район игенселәре сәсеү алдынан төрлө кимәлдәге субсидиялар буйынса 90 млн һум дәүләт ярҙамы алды. Район хакимиәте лә яҙғы эштәрҙе сифатлы итеп атҡарыу хаҡына мөмкин булғандың барыһын да эшләне, даими булышлыҡ күрһәтте. Һалынған хеҙмәттең һөҙөмтәһе булыр, тип өмөт итәбеҙ. Әйткәндәй, сәсеүҙә фиҙакәр тырышлыҡ күрһәткән механизаторҙар һәм хужалыҡтар район һабантуйында тәбрикләнеп, бүләкләнәсәк. Һабан байрамында быйыл беҙ күп йылдар игенселектә тир түгеп, хаҡлы ялға сыҡҡан ветерандарыбыҙ - Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалерҙарын да саҡырып, тантаналы рәүештә сәләмләйәсәкбеҙ.

***Мәулиҙә ИБРАҺИМОВА, һәүәҫкәр баҡсасы:*** Йыл һайын яҙҙы түҙемһеҙләнеп көтөп алам, сөнки ауылда тыуып үҫкәнлектән, ҡала фатирына ғүмер буйы өйрәнә алмай яфаландым. Күңел гел генә тышҡа, саф һауаға, ергә тартыла. Ҡар ирей башлағас та әллә нисә барып урайым баҡсама. Ергә ҡаҙып ултыртылған өс мискәне лә тапай-тапай ҡар менән тығыҙлап тултырам, сөнки торбанан һыуҙы аҙаҡ ҡына бирә башлайҙар, ә мин кишер-сөгөлдөр, һуған кеүек һыуыҡҡа бирешмәүсе йәшелсәне ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән килеп ултыртам. Унан һуң ҡар һыуы һибеп торһаң, үҫентеләр тиҙерәк тә шытып сыға. Үткән аҙнала ғына япма аҫтына помидор, ҡабаҡ, ҡыяр ултыртҡайным, кисә барып утап, һыу һибеп ҡайттым, теремек кенә ултыралар. Помидорым бик уңа, сөнки уның үҫентеләрен ҡайҙан етте һатып алмайым, ә үҙем әҙерләйем. Иң ҙур бер нисә помидорҙы алып ҡалып, орлоҡтарын йыуып-киптереп, әҙерләп ҡуям да, февраль аҙаҡтарында уҡ өйҙәге махсус һауыттарға сәсеп, үҫентеләрен тәҙрә төбөндә үҫтереп алам. Картуфты Ҡырмыҫҡалылағы ҡустым ғаиләһе менән бер участкала үҫтерәбеҙ. Уның ере иркен, ҡалалағы баҡсасылар кеүек, тиреҫте "алтын хаҡына" һатып алмайһың, ашлама үҙҙәрендә. Йорто янындағы баҡсаһына ла, туғайлыҡтағы пай еренә лә, һөрҙөрөп, мул итеп ашлап, өсөнсө йыл инде картуф ултырта - емерелеп уңа ла ҡуя. Килен менән ҡыш буйына Өфө баҙарына килтереп һаталар. Үҙем баҙарҙан да, магазиндан да йәшелсә-емеш һатып алғаным юҡ, үҙемдеке үҙемә генә түгел, балаларым ғаиләһен тәьмин итеүгә лә етә. Баҡса тотоуы еңел түгел, әлбиттә, сығымдар ҙа, хеҙмәт тә талап итә, уның ҡарауы, хаҡын сығара ул: бөтәһе лә үҙеңдеке. Әле бына еләк өлгөрөргә ултыра. Унан - ҡарағат, сейә, алма, крыжовник, һырғанаҡ... Былар береһе лә үҙенән-үҙе еңел генә килмәй, мул уңышҡа нигеҙҙе ҡул көсөндә йәлләмәй, хәләл тиреңде түгеп һалаһың шул...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*КЕМ АЛЫҠ?*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торғаныбыҙҙы беләһегеҙ.**

• Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **"400 башҡорт халыҡ йыры"; "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"**китаптарын, шулай уҡ 5 уҡыусы **Мөнир Ҡунафиндың "Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә"**, 10 уҡыусы **"Матурлыҡ календары"н** алып ҡыуанасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Бәйләнештә: **vk.com/kiskeufa**.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов Вьетнам Социалистик Республикаһының Екатеринбургтағы Генераль консулы Ву Зуй Мынг менән осрашты. Осрашыу барышында яҡтар сауҙа, машиналар эшләү, нефть һәм газ сәнәғәте, энергетика, туризм, ғилми эшмәкәрлек һәм мәғариф өлкәһендә үҙ-ара хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙе. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, төбәктә Вьетнам компаниялары ҡатнашлығында 26 предприятие эшләй.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов Венгрияның Ҡаҙандағы Генераль консулы Ференц Контра менән осрашты. Яҡтар сәнәғәт, ауыл хужалығы, инфраструктура, юл төҙөлөшө һәм мәҙәниәт өлкәһендә үҙ-ара хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙе. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, төбәктә Венгрия капиталы ҡатнашлығында ойошторолған өс предприятие теркәлгән.

✓Башҡортостанда 334 мең баланы ял һәм һауыҡтырыу сараларына йәлеп итеү ҡарала. Был республикалағы мәктәп йәшендәге балаларҙың 81,6 процентын тәшкил итә, уҙған йылдағы күрһәткестәрҙән 1,3 процентҡа юғары. Шулай уҡ 2 680 ойошма балаларҙың йәйге ялын һәм һауыҡтырыуын ойоштора. Ҡара диңгеҙ буйында 3,8 мең бала, шул иҫәптән 340 бала - "Орленок" бөтә Рәсәй балалар үҙәгендә, 850-һе Ҡырымда ял итәсәк.

✓Башҡортостанда 18,5 меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы математика буйынса база кимәлендәге Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырҙы. Был - мотлаҡ тапшырылырға тейешле ике предметтың береһе. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы ике кимәлгә бүленде. Аттестат алыу өсөн сығарылыш уҡыусылары база, ә юғары уҡыу йортона инеү өсөн профилле имтихан бирә. Быға тиклем ун беренсе класс уҡыусылары рус теленән, әҙәбиәттән һәм географиянан дәүләт һынауын тапшырҙы.

✓Башҡортостанда рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханы штат режимында үтте, тәртип боҙоуҙар булманы. "Бер ниндәй ҙә иҫкәрмәләр, имтихандан сығарып ебәреүҙәр теркәлмәне", - тип билдәләне Башҡортостан буйынса Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығы начальнигы Альмира Ғәниева. Быйыл ведомствола Берҙәм дәүләт имтиханы барышы тураһында мәғлүмәттәр туплаусы Ситуация үҙәге асылған.

*✓ Башҡорт телендәге материалдарҙы һанлыға күсереү, эшкәртеү, таратыу менән мәшғүл проекттарға ярҙам итеү зарур. Был мираҫҡа "йәмғиәт байлығы" тигән статус бирелергә һәм уларҙы бөтә халыҡ файҙалана алырға тейеш.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҠТАРЫ ЛА...

## заман талаптарына эйәрһен




**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 9-сы һанында педагогия фәндәре кандидаты Вәкил Хажин һәм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты деканы, филология фәндәре докторы Луиза Сәмситова менән диалогта телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереүгә ҡағылышлы мөһим мәсьәләләр күтәрелә. Был мәсьәләләр буйынса "Башҡорт проекттары" берләшмәһе координаторҙарының үҙ ҡарашы бар һәм уны гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашырға ҡарар иттек.**

Беҙ тиҙләнеш заманында йәшәйбеҙ. Хәҙер инде тормошобоҙҙо элемтә, социаль селтәрҙәр, мобиль яйланмалар, төрлө ҡушымталарһыҙ күҙ алдына ла килтермәйбеҙ. Технологиялар һәр йортҡа инеп кенә ҡалманы, ул беҙҙең ғәҙәттәребеҙҙе, кешеләр араһындағы аралашыу ысулдарын, эш процесын һәм мөнәсәбәттәрен тамырынан үҙгәртте. Ҡарашын киләсәккә төбәгән бер генә халыҡ та был үҙгәрештәрҙән ситтә тороп ҡала алмай. Беҙ ҙә ошо глобаль процестың бер өлөшө булырға тейешбеҙ. XXI быуатта үҙенең заманса киң мәғлүмәт саралары һәм мәғлүмәт сығанаҡтары булмаған халыҡ үҙ хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлауҙан мәхрүм ҡаласаҡ. Әгәр тиҙ арала был тармаҡты реформалау буйынса саралар күрмәһәк, телебеҙҙе һаҡлау ҙа, уны артабан үҫтереү ҙә бик ауырға төшәсәк. Был мәсьәләне уңышлы хәл итеү өсөн беҙгә бер юлы ике мөһим йүнәлештә барырға кәрәк.

Беренсенән, башҡорт баҫмаларына халыҡтың ышанысын һәм тоғролоғон кире ҡайтарыу зарур. Бының өсөн әрәяҫыса эшләргә өйрәнеү талап ителә. Был йәһәттән баш ватып тораһы ла түгел, бөтөн донъяла киң мәғлүмәт саралары бер төрлө үҫешә - булған тәжрибәне файҙаланып, өйрәнергә генә кәрәк. Бигерәк тә ҡала халҡының мәғлүмәткә һәм уның сифатына талабын иҫәпкә алыу мөһим. Күп ауылдар әлегә һәйбәт интернет бәйләнеше менән тәьмин ителмәгән, шуға ауылда йәшәүселәр сифатлы мәғлүмәт менән "иркәләтелмәгән", тимәк, уларҙың зауыҡына йүнәлеш тотоу - киләсәк тамырына балта сабыу ул. Концепцияны һәм тематиканы үҙгәртергә, баҫмаларҙағы фекер-ҡараштарҙы башҡорттар ғына түгел, төрлө аудитория вәкилдәре, шул иҫәптән туған телен белмәгән милләттәштәребеҙ ҙә ишетһен өсөн башҡа телдәрҙә лә файҙаланырға, социаль селтәрҙәрҙә һәм башҡа мәғлүмәт каналдарын үҙләштерергә, партнерлыҡ селтәрҙәренә һәм агрегаторҙарға берләшергә кәрәк. Башҡорттарҙың тауышы Рәсәй һәм донъя мәғлүмәт киңлектәрендә лә ишетелергә тейеш.

Икенсенән, заманса фекерләгән, яңы ҡорамалдарҙы һәм йәш аудиторияның теләген аңлаған кешеләр талап ителә. Быға бойороҡ биреп кенә өлгәшеү мөмкин түгел. Шуға күрә башҡорт телендә заманса каналдар һәм мәғлүмәт ресурстары булдырыу һәм үҫтереү менән мәшғүл ойошмаларға, программаларға, айырым кешеләргә ярҙам итергә кәрәк. Беҙгә ҡеүәтле интернет киң мәғлүмәт саралары, социаль селтәрҙәрҙә ҡыҙыҡлы төркөмдәр, көндәлек тормошта ярҙам итеүсе мобиль ҡушымталар, онлайн радио һәм ТВ, шулай уҡ медиаканалдар (мәҫәлән, Youtube-тағы видеоканалдар) кәрәк. Кәрәкле экосистема булдырғанда контенттың төрлө автоматлаштырылған йыйыу һәм баҫтырыу системалары (агрегаторҙар, боттар) һ.б. ҙур роль уйнай.

Тотош халыҡтың мөһим һәм етди мәсьәләләрен хәл итеү өсөн ҙур көс һәм ресурстар, миллиардтарса һумдар һәм ҙур дәүләт программалары кәрәк, тип уйларға күнеккәнбеҙ. Әммә технологик дәүерҙең шундай бер шәп яғы бар: нимәне нисек эшләргә кәрәклеген белһәң, ябай программалар ярҙамында ла ҙур мәсьәләләрҙе хәл итеп була. Мәҫәлән, башҡорт телендә аралашырға ярҙам иткән ябай ғына программа-клавиатура йәштәргә белем биреү йәһәтенән ҡиммәтле дәүләт программаларына ҡарағанда күпкә һөҙөмтәлерәк булып сығырға мөмкин. Ғилми институттың бер хеҙмәткәре айҙар буйы эшләгәнде селтәрҙәге ирекмәндәрҙең ҙур төркөмө уны бер нисә аҙнала башҡара. Ә бит ҡулланыусы айҙар буйына көтөп ултыра алмай, уға көнүҙәк мөмкинлекте бөгөн һәм хәҙер тәҡдим итергә кәрәк.

Беҙ башҡорттар өсөн мотлаҡ башҡорт телендәге сайт, ҡушымта йә башҡа продукт эшләргә кәрәк, тип уйлайбыҙ. Һәр яңы башланғысты проектлауға, эшләүгә күп ваҡыт китә, шымарғансы, ул сейлебешле һәм түбән сифатлы була. Шулай итеп, бындай продукт файҙаланыу тапмайынса, үҫешә лә алмайынса юҡҡа сыға. Үҙҙәрен "башҡорттоҡо" тип атаған башҡа программа продукттарының да абруйы төшә. Беҙгә бындай хата эшмәкәрлектән баш тартып, башҡорт телен, мәҙәниәтен һаҡлауға һәм үҫтереүгә, башҡорт халҡының үҫешенә булышлыҡ иткән һәм глобаль, төбәк базарына сығарыуға иҫәпләнгән программа йәки мәғлүмәт продукттарын әҙерләүселәргә игтибар йүнәлтергә кәрәк. Шулай итеп беҙ тармаҡта үҙебеҙҙең эшҡыуарҙарыбыҙҙы һәм яҡшы проекттарҙы барлыҡҡа килтерәсәкбеҙ. Мәҫәлән, "Бәйләнештә" социаль селтәрен локалләштереүҙән һуң, унда башҡорт телендә бик күп төркөмдәр барлыҡҡа килде, селтәр эсендә үҙенең экосистемаһы булған тотош башҡорт сегменты үҫеп сыҡты. Шуның кеүек, башҡа продукттарҙы ла үҙебеҙгә яраҡлаштырырға мөмкин. Телде ҡулланыу өлкәһен киңәйтеү ҡатмарлы продукттарҙы үҫтереүгә этәргес булып тора. Әйтәйек, башҡортса тәржемәсе барлыҡҡа килеүе инглиз, рус фильмдарының һәм тапшырыуҙарының субтитрҙарын башҡортсаға тәржемә итеү мөмкинлеген бирәсәк.

Беҙҙә башҡорт телендә төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары - текстар, китаптар, журнал һәм гәзиттәр, музыка, кино һәм программалар һ.б. бар. Уларҙың күбеһе халыҡ инә алмаған архивтарҙа, китапханаларҙа һәм фондтарҙа ята, файҙаланыу өсөн яраҡһыҙ һанлы технологияларҙа һаҡлана. Әммә бөтә донъя селтәре барлыкҡа килгәндән алып ошондай мәғлүмәттәрҙе ирекле ҡулланыу тел һәм мәҙәниәт үҫеше өсөн мөһим шарт булыуын иҫбатлай. Уларға юл ябылыуы халыҡтың үҫештә артта ҡалыуына килтерә. Башҡорт телендәге материалдарҙы һанлыға күсереү, эшкәртеү, һаҡлау, таратыу менән мәшғүл проекттарға ярҙам итеү зарур. Был мираҫҡа, ижтимағи әһәмиәткә эйә мәғлүмәттәргә "йәмғиәт байлығы" тигән статус бирелергә һәм уларҙы бөтә халыҡ файҙалана алырға тейеш. Йәнә шуныһы: әлегә интернетта башҡорттар һәм башҡорт мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт бик аҙ, шуға күрә башҡа телдәрҙә йәки икенсе илдәргә һәм төбәктәргә ундай материалдарҙы әҙерләп таратыу менән шөғөлләнгән проекттарға ярҙам итергә тейешбеҙ.

**Илдар Кинйәбулатов,**
**Марат Әхмәтшин,**
**Раил Сәлимов,**
**Әлфиә Аҡбутина,**
**Рөстәм Нуриев,**
**"Башҡорт проекттары" (www.bashkort.org) берләшмәһе координаторҙары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2015 йылда Башҡортостанда бер нисә тармаҡ предприятиеларының килеме кәмегән. Транспорт, элемтә, финанс эшмәкәрлеге, күмәртә сауҙа кәрһәткестәрен насарайтҡан. Былтыр ошо өлкә предприятиелары республика ҡаҙнаһына килемгә һалымды бер йыл элеккегә ҡарағанда аҙыраҡ күсергән. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Бюджет, һалым, инвестиция сәйәсәте һәм территориаль үҫеш буйынса комитетында төбәктең финанс министры Рида Собханғолова ошо хаҡта һөйләне.

✓Өфө художество галереяһында "Башҡортостан-Синемастан" күргәҙмә-форумы барышында "Быяла юлсы". 20 йыл үткәс" исемле юбилей кисәһе уҙҙы. Фильмдың премьераһынан һуң 20 йыл үткәс, уның авторҙары Булат Йосопов, Рияз Исхаҡов, төп ролдәрҙе башҡарыусылар Айсыуаҡ Йомағолов һәм Рушана Бабич, актерҙар Алмас Әмиров, Айрат Абушахманов, Рөстәм Хәкимов, Ирек Булатов үҙҙәренең ижад юлы хаҡында бәйән итте.

✓Өфөлә Киров районы "Берҙәм Рәсәй" партияһының урындағы башҡарма комитеты 1350 йәшелсә орлого тупланмаһы алды. Уларҙы таратыу өсөн беренсел бүлексәләрҙең секретарҙары, баҡсасылар саҡырылды. Сара "Уңдырышлы түтәл" партия проекты сиктәрендә үткәрелә. Алдан хәбәр ителгәнсә, республика баҡсасылары 40 меңдән ашыу орлоҡ тупланмаһы аласаҡ. Проект 1 майҙа башланды, уның маҡсаты - төбәктәге баҡсасыларға ярҙам күрһәтеү.

✓1 июндә ҡаты сирле балаларға ярҙам буйынса "Юғалтыуҙар - юҡ" хәйриә фонды Республика балалар клиник дауаханаһы ярҙамында "Балаларҙа һәм үҫмерҙәрҙә онкология һәм гематология сирҙәрен иҫкәртеү һәм алдан асыҡлау" тип аталған мөһим социаль әһәмиәтле проектын башлай. Проект онкология ауырыуҙарын иртә стадияла асыҡларға һәм фажиғәле эҙәмтәләрҙе кәметергә ярҙам итәсәк, тип ышана ойоштороусылар.

✓Башҡортостанда 39,5 мең самаһы туғыҙынсы класс уҡыусыһы математика буйынса Төп дәүләт имтиханын тапшыра. Шуларҙың өс меңгә яҡыны дәүләт сығарылыш имтиханын бирә, улар - һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар. Икенсе мотлаҡ фән - рус теле, уны туғыҙынсы класс уҡыусылары 3 июндә яҙҙы. Резерв көндәр - 15, 17, 21 июнь.

ҠЫҪҠАСА...

# ЮЛ ХАҠТАРЫ АРТА...

✓Баш ҡалала V Рәсәй-Ҡырғыҙстан төбәк-ара конференцияһы булып үтте. Рәсәйҙең иҡтисади үҫеш министры Александр Цыбульский хәбәр итеүенсә, илдең 70 төбәге Ҡырғыҙстан менән ауҙа мөнәсәбәттәрен һаҡлай. Былтыр Ҡырғыҙстанға Рәсәй инвестицияларының күләме ике тапҡырға артҡан һәм яҡынса 120 миллион доллар тәшкил иткән. Рәсәй Ҡырғыҙстанға тура сит ил инвестициялары буйынса (уларҙың күләме 14,5 процент тәшкил итә) Канада һәм Бөйөк Британиянан ҡала өсөнсө урынды биләй. Урта Азия республикаһында төҙөлөш, ауҙа, машиналар эшләү, еңел сәнәғәт өлкәһендә 600-гә яҡын берлектәге предприятие эшләй. Ҡырғыҙстан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Олег Панкратов билдәләүенсә, әүәлге союздаш республика менән Башҡортостан араһында ла иҡтисади һәм гуманитар мөнәсәбәттәр әүҙем үҫешә: "Ҡырғыҙстан - Башҡортостан" ауҙа йорто асылды, ул иҡтисади мөнәсәбәттәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн һәйбәт майҙансыҡ.

✓ Өфөләге 4-се бала табыу йортонда Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөн байрамса тантана менән ҡаршыланылар. 1 июндә һигеҙ ғаиләә тантаналы шарттарҙа бала табыу йортонан сыҡты, уларҙың икәүһендә игеҙәк балалар тыуған. Конференциялар залына яңы тыуған сабыйҙарын күтәргән әсәләрҙең инеүе иң тулҡынландырғыс мәл булды. "Беҙҙең бала табыу йорто илдәге иң яҡшы биш учреждение иҫәбенә инә. Киләһе йылда уға 40 йыл тула. Ошо йылдар эсендә табиптарыбыҙ 200 мең самаһы сабыйға донъяға килергә ярҙам иткән", - тине баш табиптың акушер-гинекология ярҙамы буйынса урынбаҫары Владимир Иваха. Дауалау учреждениеһе етәкселеге, табиптар, Өфө ҡалаһы Киров районындағы ЗАГС бүлеге етәксеһе Наилә Сәйетғәлина бәхетле ата-әсәләргә һәм яңы тыуған сабыйҙарға үҙҙәренең теләктәрен еткерҙе, бүләктәр һәм тыуыу тураһында таныҡлыҡтар тапшырҙы.

✓14 июндән "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы автобустарында ҡала һәм ҡала яны маршруттарында юл йөрөү хаҡы арта. Мәҫәлән, Өфөлә билет хаҡы транспорт картаһы буйынса - 20, ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндә 25 һум тәшкил итәсәк. Предприятиеның матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, республика Хөкүмәтенең "Башавтотранс" өсөн билдәләгән тарифтары дүрт йыл буйына үҙгәрмәгән һәм пассажирҙар ташыу үҙкиммәтенең ағымдағы кимәленә тап килмәй. "Пассажирҙарҙы страховкалау, яғыулыҡҡа хаҡтарҙың, транспорт һалымының артыуы пассажирҙар ташыу буйынса сығымдарҙың үҫеүенә килтерә. Шуға бәйле ҡала һәм ҡала яны маршруттарында билет хаҡын арттырырға мәжбүрбеҙ", - тине "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһының генераль директоры Тимур Аклаев.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# "МИН ӨФӨНӨҢ ЙӨРӘГЕНДӘ БУЛЫП ҠАЙТТЫМ..."

**"Евразия йөрәге" сәнғәт фестивале сиктәрендә Конгресс-холда "Мәҙәниәттәр киҫелеше: Евразия киңлектәрендә мәҙәни-ара диалог һәм хеҙмәттәшлек итеү" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы булып үтте. Сарала Башҡортостан Республикаһы башлығы Рөстәм Хәмитов, РФ буйынса ЮНЕСКО эштәре комиссияһының яуаплы сәркәтибе Григорий Орджоникидзе, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Саха-Яҡутия, Алтай республикалары вәкилдәре, ғалимдар ҡатнашты. Конференцияла ҡатнашыусы ҡунаҡтарға Өфөбөҙҙә, Башҡортостаныбыҙҙа булыу тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙарын һорап мөрәжәғәт иттек:**

*Константин Гуснак, ЮНЕСКО эштәре буйынса Молдовия милли комиссияһының генераль сәркәтибе:* Мин конференцияла халыҡ ижадының йәмғиәтте һәм дәүләтте йәшәтеүсе мөһим сара булыуы хаҡында һөйләнем. Ысынлап та, ҡайһы ғына халыҡты алып ҡараһа, уның рухи ҡомартҡылары йәшәй икән - ул халыҡ та бар. Онотолған икән - халыҡ хәле лә ҡурҡыныс аҫтында. Башҡорттарҙың был өлкәлә бик зыялы, рухлы халыҡ булыуын беләм. Был республикала мин тәүге тапҡыр ғына түгел, уның тарихы, мәҙәниәте менән яҡындан танышмын. М.Кәримдең әҫәрҙәрен тәржемәлә уҡығаным да бар. Килгән һайын баш ҡаланың күркәмләнгәндән-күркәмләнә барыуы, шундай уҡ мөһабәт мегаполисҡа әүерелеүе һоҡландыра. Кешеләренең теремек, шаян ҡарашлы, еңел һөйәкле булыуы оҡшай.

*Андрей Борисов, Саха-Якутия Республикаһының Дәүләт советнигы:* Мин башҡорт дуҫтарыма һәм сарала ҡатнашыусы ҡунаҡтарға Саха-Яҡутия Республикаһында милли мираҫты һаҡлау өҫтөндә ниндәй эштәр алып барылыуы хаҡында һөйләп киттем. Беҙ һеҙҙең менән бер тамырлы, туғандаш халыҡ. Әлеге ваҡытта, бәлки, бер-беребеҙҙе аңлап етмәһәк тә, был - улай. Төрлө сәбәптәр арҡаһында Саҡ менән Суҡ кеүек айырылып киткәнбеҙ беҙ. Әйткәндәй, мин һеҙҙең был бәйетте беләм. Беҙҙә лә уның бер нисә варианты йәшәй. "Милли кейемдәр көнө"н үткәреүегеҙ минең өсөн бер шатлыҡлы күренеш булды. Был идеяны уйлап тапҡан әҙәм бик аҡыллылыр, тип уйлайым. Халыҡтың, бигерәк тә йәштәрҙең хатта уйын өсөн генә лә бер милли атрибутты кейеп, тағып сығыуы - ул үҙе бер ҡаҙаныш. Башҡорт милләте үҙен ярата һәм башҡаларҙан да хөрмәт иттерә белә икән, тип ҡарап йөрөйөм. Бындай сифаттары булған халыҡтың тамыры ла көслө, киләсәге лә өмөтлө. Салауат Юлаев майҙаны бер ожмах мөйөшө кеүек. Йөрәге кеүек ул ҡаланың. Ҡайтҡас, "Мин Өфөнөң йөрәгендә булып ҡайттым", тиермен инде.

*Бакыт Аманбаева, ЮНЕСКО эштәре буйынса Ҡырғыҙ милли комиссияһының вәкиле, археолог, ҠР Милли академияның тарих һәм милли мираҫ институты ғилми хеҙмәткәре:* Конференцияла башҡорт халҡы менән ҡырғыҙ халҡының тарихи-мәҙәни бәйләнештәре тураһында сығыш яһаным. Мин был бәйләнештәрҙе тарихи-фактик һәм археологик дәлилдәр менән раҫланым. Ошо өлкәләге яһаған асыштарым һеҙҙең өсөн дә ҡыҙыҡлы булғандыр, тип иҫәпләйем. Күреп торағыҙ, беҙгә тәржемәсе кәрәкмәй. Тура-нан-тура уҡ булмағанда ла, яҡынса һөйләшеү, хәбәрләшеү мәғәнәһен аңлай алабыҙ. Был үҙе үк беҙҙең туғандаш, ҡәрҙәш халыҡтар булыуыбыҙ күрһәткесе. Баш ҡалала үҙенсәлекле саралар шаһиты булдыҡ. "Урал моно", "Милли кейем көнө", "Этно төн" һ.б. халыҡтың үҙаңын уятыуҙың иң һәҙмәтле алымдарының береһелер. Беҙҙә был саралар һеҙҙәге кеүек үк ҙур массалар өсөн үтмәй, ҡайтҡас, мотлаҡ үрнәк итеп һөйләйәсәкмен.

*Амензаде Райха Бархудар ҡыҙы, Әзербайжан Республикаһының Милли академияһы, архитектура докторы, профессор:* Көнсығыштың һәм Әзербайжандың урта быуат китапханалары хаҡында мәғлүмәттәр алып килдем конференцияға. Китаптан да ҙур байлыҡ, унан аңлы дуҫ юҡ. Беҙҙә шулай тиҙәр. Әллә күпме халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, шул көнсығыш китаптарында белем алғанбыҙ. Тимәк, беҙҙең тамырыбыҙ ғына түгел, ғилемебеҙ, уҡымышлы, белемле кешеләребеҙ ҙә уртаҡ булған.

Өфөнөң боронғо архитектура ҡомартҡыларын беренсе йыйл күҙәтмәйем. Был өлкәлә фәнни эштәр башҡарған йәштәргә етәкселек иттем, боронғо китаптар, ҡульяҙмалар серен өйрәнеүселәргә лә остаз булдым. Шунлыҡтан, мин башҡорттарҙың был өлкәһен яҡшы беләм, тип ҡыйыу рәүештә әйтә алам. Өфөнөң ҡайһы бер өлөштәрен Баҡыға оҡшатып китәм, шундай уҡ сағыулыҡ, йәшеллек, төҙөклөк, таҙалыҡ! Бындай күренештәр ерен яратҡан, мәҙәниәтен белгән халыҡтар өсөн генә хас. Мин өфөләрҙе шундайҙарҙан иҫәпләйем.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТАҒЫ ИКЕ ПРОСПЕКТ



**Ҡала округы Советы депутаттары сираттағы ултырышта урамдарға исемдәр биреү тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Һеҙҙемтәлә Өфөлә ике проспект барлыҡҡа килде. Уларҙың Халыҡтар дуҫлығы исемлеһе Затон биҫтәһен ҡаланың төп өлөшө менән тоташтырыусы Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙән Әхмәтов исемендәге урамға тиклем аралағы трассаға бирелһә, икенсеһе - Берҙәмлек проспекты - Октябрь районындағы Өфө-Нуғай автоюлынан Калинин районындағы Йылҡыбай ауылында проектланған урамға тиклем ҡала әһәмиәтендәге магистралгә ҡушылған. Шулай уҡ Затонда - 9, Калинин районында 51 бульвар, урам һәм тыҡрыҡҡа исемдәр бирелгән. Затондағы яңы урамдарҙың береһе рейхстагҡа беренселәрҙән булып Еңеү байрағын ҡаҙаусы Советтар Союзы Геройы Ғәзи Заһитов исемен йөрөтәсәк. Әйткәндәй, ул - исем бирелгән урамдар араһында яңғыҙы ғына "фамилиялы".

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓4 июндә Ҡыйғы районында район һабантуйы барышында "Йор уҙән" этно-фестивале уҙа. "Йор уҙән" республика этно-фестивале барышында "2016-2020 йылдарҙа Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарын иҡтисади үҫтереүҙең урта сроклы комплексы программаһы"н тормошҡа ашырыу сиктәрендә этно-музыканы үҫтереү мәсьәләләре буйынса эш кәңәшмәһе була. Унда Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле, Салауат, Ҡыйғы райондарының башҡорт коллективтары, мәҙәниәт бүлектәре етәкселәре ҡатнаша.

✓Май айында Санкт-Петербургтың "Киноокo" студияһы Өфө районындағы Зәнгәркүл буйында ҙур фильм төшөрҙө. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Бейеүҙән йәмә" документаль кино проекты сериалының береһендә төп герой булды. Режиссер һәм продюсер Василий Щербенконың "Бейеүҙән йәмә" кино проекты бейеү мәҙәниәтенә һәм милли кейем традицияларына арналған.

✓Июнь башына төбәктә биш меңдән ашыу талпан ҡаҙалыу осрағы теркәлгән. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы хәбәр итеүенсә, ошо хәүефле бөжәктәрҙән тешләнгән 5421 кеше, шул иҫәптән 1754 бала медицина учреждениеларына мөрәжәғәт иткән. 1 апрелдән Гигиена һәм эпидемиология үҙәге лабораторияһында тикшерелгән 3609 талпандың 204-дә - энцефалит, 300-дә боррелиоз вирусы табылған.

✓2016 йылдың 25 сентябренә тиклем ун көн һайын Өфө - Салоники - Өфө маршруты буйынса тура рейстар ойоштороу ҡаралған. Осош ваҡыты 4,5 сәғәт тәшкил итә. Маршрутта 144 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A 319 самолеттары эшләй. Республиканың баш ҡалаһынан авиатранспорт иртәнге сәғәт 8-се 5 минутта йәки 9-сы 25 минутта оса. Салоникиға ла иртән барып етеү ҡаралған.

✓Быйыл ғинуар-март айҙарында Өфөләге ҙур һәм уртаса предприятие, ойошма хеҙмәткәрҙәренең уртаса айлыҡ эш хаҡы 34 470 һум тәшкил иткән.Баш ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда хеҙмәт хаҡы 5,9 процентҡа артҡан. 2016 йылдың февралендә Башҡортостанда уртаса эш хаҡы 25 163 һум тәшкил иткән. Эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы - 8863 һум.

ИҠТИСАДСЫ ӘЛИФБАҺЫ

**2015 йылдың 1 ғинуарынан физик шәхестәрҙең милкенә һалым кадастр хаҡы буйынса иҫәпләнәсәк икәнен ишеткәнһегеҙҙер. Был законға үҙгәреш индергән депутаттар, модернизация һалым йөкләмәһенең артыуына килтермәйәсәк, тиһәләр ҙә, халыҡты яңы һалым ҙур суммаларҙа килеп ҡуйыуы хәүефләндерә барыбер ҙә. Шулай ҙа был сумма менән килешмәгәндә ҡайҙа мөрәжәғәт итергә? Милектең кадастр хаҡын кем билдәләй? Ошо һорауҙарға Башҡортостан буйынса Росреестр идаралығы белгесе Әлфиә Флюс ҡыҙы ҮТӘШЕВА асыҡлыҡ индерә.**

# МИЛЕККӘ...

## яңы һалым тураһында

**▸ Ерҙең кадастр хаҡын билдәләү ни өсөн кәрәк?**

- Әле совет ваҡыттарынан ҡулланылып килгән фатирҙың инвентаризация хаҡы урынына кадастр хаҡын индереүҙең төп маҡсаты - һалым һалыу. Инвентаризацион цифрҙар йорт һәм фатир төҙөүҙә ҡулланылған сығымдарҙы иҫәпкә ала. Шуға ла уның хаҡы милек баҙарындағы хаҡтан күпкә түбән килеп сыға. Дәүләт нигеҙле рәүештә һалым һалынған милектең ҡиммәтерәк булыуын теләй ҙә инде. Законға ярашлы, ерҙең кадастр хаҡы милеккә һалым, был фатир менән бәйле килешеүҙәрҙең хаҡын, әйтәйек, күсемһеҙ милекте һатыу, аренда хаҡын билдәләү һ.б. маҡсаттарҙы ла күҙ уңында тота.

Закон буйынса 2015 йылдың 1 ғинуарынан (был республика өсөн берҙәм дата) физик шәхестәргә торлаҡ йорт, фатир, бүлмә, гараж, машина урыны, берҙәм күсемһеҙ комплекстар, тамамланмаған төҙөлөш объекттары, башҡа биналар, ҡоролмалар өсөн һалым яңыса иҫәпләнә. Кадастр хаҡы буйынса, милектең төрөнә ҡарап, һалым иҫәпләү ставкалары 0,1, 0,5, 2 проценттан артмаҫҡа тейеш. Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт министрлығы йыл һайын 1 ғинуарға тиклем һалым һалыу объекттары исемлеген төҙөй һәм раҫлай. Был исемлек министрлыҡтың рәсми сайтында урынлаштырыла. Исемлектә майҙаны 1000 квадрат метрҙан күберәк булған административ-сауҙа биналары теркәлә. Физик шәхестәр хәҙер милек һалымын үҙҙәре һанай ала. Бының өсөн Кадастр палатаһының рәсми сайтындағы "Һалым калькуляторы" тигән бүлеккә инергә кәрәк. Халыҡта милеккә һалымдың кадастр хаҡы буйынса һорауҙар тыуасаҡ әле, сөнки был закон 5 йыл дауамында 0,2 коэффициенты менән яйлап индереләсәк. 2016 йыл өсөн коэффициент - 0,4, 2017 йыл өсөн - 0,6, 2018 йыл өсөн - 0,8 тәшкил итә. 2019 йылдан һалым тулы кимәлендә һалынасаҡ. Шулай уҡ граждандарҙың бөтөн категориялары ла бүлмәнең 10 квадрат метры, фатирҙың 20 квадрат метры, йорттоң 50 квадрат метры өсөн түләмәйәсәк, был майҙандарҙың кадастр хаҡы һалым иҫәпләгәндә алып ташланасаҡ.

**▸ Ерҙең кадастр хаҡы нисек билдәләнә?**

- Дәүләт тарафынан кадастр хаҡын билдәләү 3 йылға 1 тапҡырҙан йышыраҡ, 5 йылға 1 тапҡырҙан һирәк булмаҫҡа тейеш. Кадастр хаҡын билдәләү процедураһы РФ Хөкүмәтенең башҡарма органдары ҡарары буйынса үткәрелә. Дәүләт кадастр хаҡын билдәләү тураһында ҡарар ҡабул иткән орган заказсы була. Кадастр хаҡын баһалаусы конкурс нигеҙендә һайлана. Баһалаусы тарафынан күсемһеҙ милек объектының кадастр хаҡын билдәләү буйынса отчет төҙөлә. Шуны ла әйтергә була: билдәләнгән кадастр хаҡының сифатын, был процедураны үткәреү өсөн һайланған методтарҙың дөрөҫлөгөн, баһалаусы сығарған һығымталарҙың нигеҙле булыуын-булмауын тикшереү Росреестрҙың да, башҡа дәүләт органдарының да бурысына инмәй. Тимәк, кадастр хаҡын билдәләү буйынса һорауҙар менән заказсы һәм баһалаусыға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**▸ Ысынлап та, бөгөнгө көндә билдәләнгән кадастр хаҡы менән килешмәүсе граждандар арта бара. Был осраҡта уны яңынан билдәләүҙе талап итергә мөмкинме?**

- Билдәләнгән кадастр хаҡы менән килешмәйһегеҙ икән, судҡа бирергә лә ярай, әммә был мәсьәләне судһыҙ хәл итергә лә була. Тап ошо маҡсат менән Росреестр идаралығы эргәһендә кадастр хаҡын билдәләү һөҙөмтәһендә тыуған бәхәстәрҙе ҡарау буйынса Комиссия булдырылды. Кадастр хаҡы буйынса судҡа дәғүә яҙылһа, юридик шәхестәргә был Комиссияға мөрәжәғәт итеү кәрәк, ә физик шәхестәргә был мотлаҡ түгел. Сайтта "Кадастр баһа" бүлегенең "Кадастр хаҡын билдәләү һөҙөмтәләре буйынса бәхәстәрҙе ҡарау" ("Рассмотрение споров о результатах определения кадастровой стоимости") пунктында ғаризаға беркетелә торған документтарҙың тулы исемлеге бирелгән.

**▸ Бөгөнгө көндә республикала кадастр хаҡын билдәләү буйынса ниндәй эштәр башҡарыла, уның һөҙөмтәләрен кем раҫлай?**

- 2014-2015 йылдарҙа Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Нефтекама, Октябрьский ҡалалары һәм Туймазы районы халҡы йәшәгән урындарҙың кадастр хаҡын билдәләү буйынса эштәр башҡарылды. Былтыр шулай уҡ республикалағы торлаҡ һәм кеше йәшәмәгән фонд объекттарының кадастр хаҡы билдәләнде. Күсемһеҙ милек объекттарының дәүләт тарафынан билдәләнгән кадастр хаҡтары - БР Хөкүмәте, Өфө ҡалаһы буйынса Өфө ҡала хакимиәте ҡарары менән раҫланған һәм БР-ҙың Хоҡуҡи мәғлүмәттәр буйынса рәсми интернет порталында баҫтырылған. 2016 йылда республиканың ауыл хужалығы өсөн тәғәйенләнгән ер участкаларының кадастр хаҡын билдәләү буйынса эштәр планлаштырыла.

**Наталья ШАҺИЕВА әҙерләне.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕР ТҮЛӘҮҘӘН...

**1 майҙан Башҡортостанда электр энергияһы өсөн дөйөм йорт ихтыяжы яңыса иҫәпләнәсәк. "Башҡортостандың энергия һатыу компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Олег Козловтың матбуғат конференцияһында әйтеүенсә, июндә граждандар фатирҙа электр энергияһын ҡулланған һәм дөйөм йорт ихтыяжы нормативы өсөн иҫәп аласаҡ. Айырманы иһә идара итеүсе компания түләйәсәк.**

Республикала күп фатирлы фондтың яртыһында дөйөм йорт ихтыяжы өсөн түләү алты проценттан артмай, тип билдәләне топ-менеджер. Улар өсөн бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк. Дөйөм йорт ихтыяжы дәүмәле күберәк булған йорттарҙа йәшәгән кешеләргә түләү аҙыраҡ буласаҡ. Олег Козлов һөйләүенсә, дөйөм йорт ихтыяжы юғары булған йорттарҙың сығымдарын тикшереү барышында уларҙың щиттарына предприятие, сауҙа киоскылары, йә иһә светофор, хатта полиция пунктының тоташтырылған булыуы асыҡланған. Хәҙер идара итеүсе компаниялар сығымдарҙы күҙәтеп барасаҡ, сөнки уларҙы йортта йәшәгән кешеләрҙең иҫәбенә яҙа алмаясаҡ.

"Дөйөм йорт ихтыяжы энергияны һаҡсыл ҡулланыуға бәйле. Был мәсьәләне бер йылда ғына хәл итеп булмаҫ, моғайын. Йорт подъездарының күбеһендә лампочкалар тәүлек буйына янып тора. Энергия ҡулланыуҙы кәметеү буйынса программалар ҙа бар. Һуңғы йыл ярым эсендә беҙ дөйөм йорт ихтыяжының уртаса күләмен 22 проценттан 11-гә тиклем кәметә алдыҡ", - тип хәбәр итте Башҡортостан энергия һатыу компанияһының башҡарма директоры.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# ҠЫЙРАТАМЫ?

## Тәнҡитләмәй үтмәйек

**Аңламаҫһың был кеше тигән йән эйәһен: ул башта үҙенең һаулығын юғалтҡансы эшләй, һуңынан һаулығын тергеҙеү өсөн тырыша; булмаһа, юҡ тип баш вата, булған нәмәнең ҡәҙерен белмәй; башта булдырыу өсөн көс сарыф итә, һуңынан төҙөгәнде емерә... Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмә лә ошо булғандың ҡәҙерен белмәү темаһына арналды, тиергә мөмкин.**

Мәғлүм булыуынса һәм һәр ҡайһыбыҙ күреп тороуынса, Өфөлә йәшәү һәм ял итеү өсөн барлыҡ уңайлыҡтар булдырырға тырышыла. Үкенескә күрә, бик йыш вандализм һәм дөйөм йәмәғәт ҡулланыуында булған милекте ҡыйратыу, ватыу, боҙоу осраҡтары күҙәтелә. Һөҙөмтәлә муниципалитет уларҙы тергеҙеү, ремонтлау өсөн ҡабаттан финанс сығымдары тотонорға мәжбүр була, ә бит ул средстволарҙы ҡала инфраструктураһын артабан үҫтереүгә йүнәлтергә мөмкин булыр ине. Һуңғы айҙа ҡала милкенә зыян килтереүҙең шундай осраҡтары теркәлгән: фонарҙар ватылған, ағастар һындырылған, яңы ултыртылған сәскәләр ҡаҙып алынған, граффити һүрәттәре зыянланған, яҡтыртыу элементтары ватылған, хатта хулигандар Еңеү паркындағы хәрби техниканың яңы экспозицияһын ватыуҙан да тартынмаған. "Гастелло" туҡталышындағы ер аҫты үткәүеле иһә ошо арала ғына ике тапҡыр тергеҙелгән. Шулай уҡ башҡа үткәүелдәр ҙә, туҡталыштағы павильондар, ҡала урамдарындағы һәм аллеяларҙағы сүп һауыттары ғына түгел, йәмәғәт транспорты ла ҙур зыян күрә. Йыл дауамында ошондай күренештәр меңдән ашып китә.

Аныҡ гражданлыҡ позицияһы һәм үҙенең уңайлылығы, йәшәгән ҡалаһының төҙөк булыуы теләге һәр кешелә булырға тейешлеген билдәләп, ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов был йәһәттән профилактика, тәрбиә эштәре алып барыуға киң мәғлүмәт сараларын да ҡушылырға саҡырҙы.

Әйткәндәй, РФ Енәйәт кодексының 214-се статьяһында билдәләнеүенсә, вандализм өсөн 40 мең һумға тиклем йәки ғәйепләнеүсенең эш хаҡы йәки башҡа килеме күләмендә өс айға тиклем штраф ҡаралған. Яза шулай уҡ 360 сәғәткә тиклем мотлаҡ мәжбүри эш йәки бер йылға тиклем төҙәтеү эше, йәиһә өс айға тиклем ҡулға алыуҙы ла ҡарай.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тромбофлебит

❖ 1 ус аҡ талботаҡтарын 3 литр ҡайнар һыуға һалып, 10 минут һүрән утта тоторға. Бер сәғәт төнәткәс, һөҙөргә. Ике көнгә бер тапҡыр йоҡлар алдынан 15 минут аҡтарҙы шуға тығып ултырырға. Бер сәғәттән һуң йоҡларға ятырға ярай. Дауаланыу курсы - 7-8 ванна.

### Дарыу - түтәлдә

❖ Ашҡаҙандың сей яраһы, әселек юғары булғанда ҡабығы менән ҡырылған ҡыҙыл картуф һутын көнөнә 3 мәртәбә һәм йоҡо алдынан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ Рахит, шәкәр ауырыуы менән сирләгән балаларға һоло һаламы бешерелгән ваннала ултырыу файҙалы. Уны сәй кеүек бешереп эсерһәң дә ярай.

❖ 1 стакан һолоно 1 литр һыуҙа бешереп, 1/4 өлөшө быуға әйләнгәнсе тоторға. Көнөнә 3-4 мәртәбә икешәр стакан эсергә. Был дауа үт ҡыуыу өсөн файҙалы.

### Гайморит

❖ Гаймориттан яҫы уҫаҡ ағасы ярҙам итә. Гайморит ҡыуышлығы тирәһенә уҫаҡтың бер киҫәген 5-7 минут дауамында көнөнә 3 мәртәбә ҡуйырға.

### Ҡайын япрағы

❖ Ҡайын япрағы төнәтмәһе матдәләр алышыныуын, тир һәм һейҙек бүлеп сығарыуҙы тиҙләтә. Бер сынаяҡ һыуға 1 ҡалаҡ төнәтмә ҡушып, битте таҙартырға ла була, сәс йыуғанда ла ҡулланаһың.

### Арҡа ауыртһа...

❖ Яңы ғына киҫелгән ҡарағай онтағын (опилка) бер һауытҡа һалып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, аҙыраҡ ҡаплап тотоғоҙ. Һыуын түгеп, ҡалған ҡуйыһын ауыртҡан ерегеҙгә ҡуйығыҙ, йылы итеп ябынығыҙ. Радикулиттан да килешә. Бер нисә тапҡыр эшләһәгеҙ, йүнәлерһегеҙ.

### Һалҡын тейһә...

❖ Башлы һуған ҡабығын плитәлә төтәтеп еҫкәгеҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ТУЛА БАҪЫУ

Туланы яңғыҙ-ярым баҫып булмай. Ҡатындар, ҡыҙҙар өмәгә саҡырыла. Йә эште ҡулалмаш эшләйҙәр. Эш ырамлы булһын өсөн, тула баҫҡан ыңғайға йырлашып та алалар:

*Аҡ тулалар, ай, тиҙ керегә,*
*Арҡау, буйы тигеҙ эрләнһә,*
*Бер туғандарың да ят була ул,*
*Ситтә йөрөп, күңел керләнһә.*

*Булыр микән был тула,*
*Булмаҫ микән был тула,*
*Был туланы баҫып бөткәс,*
*Уйнатыр микән хужа?*

*Йырлай-йырлай өмәләрҙә*
*Гөрләп тула баҫабыҙ.*
*Йырлап, гөрләп, тула баҫып,*
*Аҙаҡ күңел асабыҙ.*

Борон башҡорттар тула кейем кейгән. Ҡыш буйы йөн иләгәндәр ҙә, өмә яһап, уны баҫыр булғандар. Егерме биш аршин туланы бер кистә баҫҡандар. Тула баҫыусыларҙы хужа, тәмле-тәмле аштар бешереп, һыйлар булған. Тула баҫҡанда ҡыҙҙар шулай тип йырлар булған:

*Тула, тула, тула ла,*
*Тулала ҡыҙҙар була.*
*Тула баҫҡан матур ҡыҙҙың*
*Ҡаштары ҡара була.*

*Йөн эрләйем, йөн эрләйем -*
*Йөнөм бер ҙә ырамай.*
*Кешеләрҙе кейәү һорай,*
*Беҙҙе бирәү һорамай.*

## ШӘЛ БӘЙЛӘҮ

Шәл бәйләгәндә, ҡыҙ-ҡырҡын киске ултырмаға йөрөүсән. Сөкөр-сөкөр һөйләшә-һөйләшә, кәңәшләшә-кәңәшләшә эшләйһен. Күмәкләшеп йә алмаш-тилмәш йырлашып та алаһың:

*Шәл бәйләйем, шәл бәйләйем,*
*Уртаһынан күҙ алам.*
*Күреп туймай ике күҙем,*
*Күҙем талғас, кире алам.*
*Шәлем аҡлы, шәлем аҡлы,*
*Шәлем аҡлы, шаҡмаҡлы.*
*Көртәләп алырҙай булам,*
*Һин йөрөгән һуҡмаҡты.*
*Шәл бәйләһәм дә, күренә*
*Сәсемдең беҙ(е)рәһе.*
*Ай ҙа яңғыҙ, тип әйтәләр -*
*Бар уның Зөһ(ө)рәһе.*

## ЕЛӘККӘ БАРҒАНДА

*Әпәләмә, түпәләмә,*
*Туҫтаҡҡайым, тулып кит!*

*Бында еләк күп икән,*
*Айыу-бүре юҡ икән.*

*Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям*
*Балаларға бүләккә.*

*Табыл, табыл, табыл,*
*Табылмаһаң, ҡайтам.*

Еләккә барғанда, яндауҙарҙы* һелтәп ебәргән кеше булаһың да:

- *Тул, ниңә тулмайһың? - тиһең.*

Йәки:

- *Еләккәйем, йыйыл, йыйылмаһаң, ҡайтам, - тиһең.*

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*** Яндау-** яҫы, бөтөн йүкә йә уҫаҡ ағасынан эшләнгән һауыт.

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

# ТӘБИҒӘТ БЕҘҘЕ ҠУРСЫЙ,

## беҙ генә уны аямайбыҙ

**Электр утһыҙ, газһыҙ ҡалыуҙы артыҡ ҡурҡыныс итеп күрмәйем мин. Заманында уларһыҙ ҙа йәшәгәндәр. Ә бына тәбиғәткә сыҡҡанда нимәләрҙелер мотлаҡ һалып алырға кәрәклекте күҙ уңында тоторға кәрәк.**

Мәсәлән, йәйҙең эсе көнөндә еләккә тип сыҡҡанда ла шырпы (зажигалка), бысаҡ, һыу кеүекте алыу мотлаҡ. Еләк-емешле мәлдә аҙашҡанда туҡланыу инештәре етерлек. Урманда юлдың ҡайһы яҡта, ауылдың йәки йылғаның ҡайҙалығын белеү өсөн ергә ятып, уға ҡолағыңды терәп, тыңларға була. Ҡайҙалыр юлда машина килә икән, баҫып торғанда һин уны ишетмәйәсәкһең, ә ер аша хатта алыҫ түгел йылға шаптырлауын да, ат тояғы тупылдауын да ишетергә мөмкин. Урманлы-таулы зонала тау түбәнгә хәрәкәт итергә кәрәк. Бында йылғалар ҙа, кешеләр йәшәгән урындар ҙа түбәндә урынлаша.

Йәй көндәре еләк-емеш менән генә тамаҡ туймай икән, ҡош ояларын эҙләп ҡарағыҙ, йомортҡаһын тапҡанда, уны сейләй ҙә эсергә була. Йылға тирәләрендә нәҙек тал сыбыҡтарынан кескәй генә мурҙа ишеп алыу ҙа артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмай. Мин йылға буйҙарында йөрөгәндә мурҙа үреп, берәй тарыраҡ шаршы тамағына һалып китәм дә, ярты көн тирәһенән бер нисә балыҡлы булам. Берәй киң япраҡты һыулап (йәки шул килеш), балыҡты шуға төрөп, утҡа һалам. Балыҡ көймәй генә бешеп сыға. Ут булмағанда балыҡты сейләй ашау ҙа мөмкин, ул мал ите кеүек ауырытмай.

Йүкә ағасын һыҙырып, тоҙаҡ яһап, төрлө ерҙәргә ҡуйып сығырға була. Бүҙәнә, ҡуян, сел эләгергә мөмкин. Ҡуян һуҡмағын эҙләп табыу ҙа ауыр түгел, тик иғтибарлыраҡ ҡына булырға кәрәк. Ҡуян тиҙәге осрай икән, шул тирәләргә тоҙаҡ һалаһың. Ҡуяндың тиреһе бик тиҙ сиселә, уны ойоҡ сискән кеүек итеп һыҙырып төшөрәләр. Эсендәгеләрен дә бер тамсы ҡанһыҙ, бер бысраныуһыҙ ғына алырға була. Унан һуң тәрән булмаған соҡор ҡаҙып, ҡалын итеп япраҡтар түшәйһең, ҡуянды шунда һалаһың да, өҫтөнә тағы ла йәшел япраҡтар менән ябаһың, ҡатлап тупраҡ һалаһың да, өҫтөнә ут яғаһың. Өс сәғәттән усаҡ аҫтындағы ит үлән еҫендә ыҫланып, бығып ҡына бешеп сыға. Ут өҫтөнә ҡуйып, яндырыпкөйҙөрөп бешергәнгә ҡарағанда, күпкә тәмлерәк тә, йомшағыраҡ та була.

Ҡышҡы урманда ылыҫлы ағастың (ҡарағай, ҡарағас, шыршы) мүген ашарға мөмкин. Уны төрлө витаминдары өсөн медицинала ла ҡулланалар. Имән ағасы ҡайырыһының эске яғында ит кеүек аҡ йомшаҡ бар, шул ашауға яраҡлы. Муйыл, мышар, ҡайын ағастарының да ҡайыры аҫты "ите" әсе түгел. Саған, мышар, тал кеүек йомшаҡ ағастарҙың нәҙек ботаҡ остары ла сәйнәмле. Ҡыҫҡаһы, хайуандар кимергән бар ағастарҙың ҡайырын да, астан үлмәү маҡсатында, аҙыҡ итергә була. Имән ағасы янында мотлаҡ сәтләүек буласаҡ, ҡар аҫтынан ҡаҙып ҡарарға кәрәк. Бөтөн был ағас ҡайырылары ла, сәтләүек тә эсе һыуҙа оҙаҡ ҡайнаһа, боламыҡҡа әүерелә, эсеүгә яраҡлы була.

Ҡайһы бер үләндәр ҡыш көнө лә ҡар өҫтөнән ҡалҡып ултыра. Ҡырағай ҡуҙғалаҡтың орлоғо ҡойола һалып бармай, шуны һыпырып алып ашарға йәки, мөмкинлек булғанда, орлоҡтарҙы ҡайнар һыуҙа быҡтырып туҡланып була. Ҡарабойҙай бутҡаһы һымаҡ масса килеп сыға. Үләндәрҙе танымаған хәлдә лә, ҡар өҫтөндә сосайып, орлоҡта көйө ултырған бөтә үләндең дә орлоғо "бешереүгә" бара. Был үҙенә күрә ҡайнар тамаҡ.

Ут сығарыу өсөн, кибеп, серей башлаған ағастың ботаҡ урынын (күҙен) ҡарап табып, шунда осло башлы ҡоро ботаҡты тығып, бик шәп тиҙлектә устар араһында орсоҡ кеүек итеп өйөрөлтөргә кәрәк. Был "күҙ" сайырлы урын булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Ботаҡ "күҙ"гә тығыҙ ғына итеп инеп ултырһын. Шулай ҡыҙыу-ҡыҙыу итеп ышҡығанда, ут сыға. Ут сығарыуҙың күп төрҙәре бар, әммә ошоноһо иң еңеле. Бер тоҡандырылған утты һүндермәскә тырышырға кәрәк. Әгәр үҙегеҙ менән тимер котелок-маҙар булһа, икенсе урынға күскәндә уға һалып, ҡуҙ алып китегеҙ.

Ҡышҡы урманда (яланда ла) ҡыуыш ҡороуға йәки ағас башына менеүгә ҡарағанда, көрт эсен өңөп инеп ятыу күпкә хәйерлерәк. Ҡар үҙе үк йылыны тота, өҫтә һин тунасаҡһың йәки йоҡлап китеп, ҡолап төшәсәкһең. Маралдарҙың, боландарҙың эҙе осраһа, уларҙың хәрәкәт итеү йүнәлешенә иғтибар ит. Урман малдары ҡышын ауыл яғына ҡарай шылыша, уларға кешеләргә яҡыныраҡ булыу ҡышлау өсөн хәүефһеҙерәк.

Бөтөн үрҙә һанап үтелгән нәмәләрҙе файҙаланып, урманда аҙна-ун көн йән аҫырарға була. Иң мөһиме, паникаға бирелмәскә һәм ҡурҡыуға юл ҡуймаҫҡа. Урманда аҙашып үлгәндәрҙең ун проценты ғына - аслыҡтан, ә туҡһан проценты өмөтһеҙлек һәм ҡурҡыу ҡорбаны була. Онотмағыҙ, ниндәй генә тәбиғәт шарттарында ла тереклек итеү форсаты бар, тәбиғәт беҙҙе үҙендә йәшәй алырлыҡ итеп яралтҡан, ул беҙҙе иҫләй, бары беҙ генә уны онота төшкәнбеҙ.

**Зәбир СӘЙҒӘФӘРОВ.**
**Бөрйән районы.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы дауам итә. Киләһе хатты беҙгә Әлфиә Батталова ебәргән. Ул һәр кем уҡырға тейешле китаптар араһында мотлаҡ рәүештә мәғрифәтсе шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың йыйынтығы булырға тейеш, тигән фекерҙә.**

- Мифтахетдин Аҡмулла заманына күрә бик алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы, тормош тәжрибәһе туплаған олуғ шәхес булған. Уның шиғырҙарын уҡыған кеше шағирҙың иҫ киткес һүҙ байлығына, һәр юлда тәрән мәғәнә йәшереп яҙыуына хайран ҡала. Аҡмулланың бер шиғыры ла тиктомалға, күңел ҡушыуы буйынса ғына яҙылмаған төҫлө. Уның ижады киләһе быуындарға, милләттәштәренә үҙе туплаған ғилемде, фәһемде, аҡылды еткереү маҡсатына ярашлы барлыҡҡа килгән кеүек. Бөгөнгө заманда М. Аҡмулла шиғырҙарын уҡыуҙың файҙаһы шунда: тура һүҙле, әсе телле Аҡмулланың һәр юлында хәҡиҡәт йәшеренгән. Шуға күрә, "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының китаптар/әҫәрҙәр исемлегенә "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосынан һуң тәүгеләрҙән булып индерелергә тейеш китап - ул Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы.

Бөгөн йәштәр кешенең психологияһына ҡағылышлы, тормош һынауҙарына ҡаршы тороу өсөн көс табырға ярҙам иткән, төрлө философик китаптарҙы күп уҡый. Ә бит Мифтахетдин Аҡмулланың шиғырҙары башҡорт кешеһенең психологияһына, философияһына арнала һәм башҡорт мөхитендәге проблемалар буйынса күп мәсьәләләрҙе аңлатып бирә. Уның "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" шиғырынан тыш, актуаллеген юғалтмаған, һәр заман кешеһенә кәрәкле шиғырҙары байтаҡ. Һуҙ аҙағында шундай дүрт юллыҡтарҙың береһен килтерәм:

*Ир аҙмаҫ - ямандарға эйәрмәҫ булһа,*
*Ошаҡ йөрөтөп, кеше ғәйебен тирмәҫ булһа.*
*Һүҙеңдең кәҙерен белер шунда әҙәм -*
*Аҡылы - аҡылыңа тиңдәш булһа.*

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙән тағы ла "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына тәбәп ебәрелгән хаттар көтөп ҡалабыҙ. "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып та үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

✓ ***Башҡорт мәктәптәре һәм гимназиялары күбәйҙе, әммә башҡорт телендә аралашҡан уҡыусылар кәмене; башҡорт гәзит-журналдары ишәйҙе, ләкин уларҙы алдырып уҡыған ғаиләләрҙе "Ҡыҙыл китап"ҡа ғына индерергә ҡалды.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡының яҙма теле булмаған, тип өйрәттеләр беҙҙе мәктәптә. Уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында ғына туған телебеҙҙең ғәжәп бай тарихлы булыуына, уның тамырҙары VI-VII быуаттарҙағы Орхон-Йәнәсәй яҙмаларына уҡ барып тоташыуына инандыҡ. Шәрҡиәтселәр фекеренсә, төркиҙәрҙең әҙәби теле 1300 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгән, шул уҡ ваҡытта инглиз теле ни бары XVI быуатта формалашҡан.**

# ТЕЛ ЯҘМЫШЫ - ҮҘ ҠУЛЫБЫҘҘА,

## йәки 95 йыл элек үк башҡорт теленең дәүләт теле итеп иғлан ителеүе тураһында

Башҡорт әҙәби теленең тарихын өйрәнеүҙә арҙаҡлы ғалимдар Н. К. Дмитриев, Ж. Ғ. Кейекбаев, Р. Х. Халиҡова, Ә. Ғ. Бейешев, Т. М. Ғарипов, И. Ғ. Ишмөхәмәтов, Э. Ф. Ишбирҙин, Ә. М. Аҙнабаев, Ф. Ғ. Хисамитдинова һәм башҡаларҙың хеҙмәте айырыуса ҙур. Мәҫәлән, боронғо шәжәрәләрҙең тел-стиль үҙенсәлектәрен тикшереп, Рәйсә Хәлил ҡыҙы Халиҡова XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорт теленең ғәмәлдә булыуын, эш ҡағыҙҙарында әүҙем ҡулланылыуын ышаныслы иҫбат итте.

Туған телебеҙҙең 1917 йылда ғына мөғжизә менән "һә" тигәнсә барлыҡҡа килмәгәнен, уның бай тарихы булыуын шул дәүерҙә Башҡорт Хөкүмәтен төҙөүгә һәм уны үҫтереүгә ҙур көс һалған башҡорт зыялылары ла яҡшы белгән. Башҡорт теленең торошо һәм уны артабан үҫтереү мәсьәләләре иң тәүҙә 1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбур ҡалаһында үткән III Бөтөн башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡарала. Бер ай үтеүгә, йәғни 1918 йылдың ғинуарында, башҡорт теле Бәләкәй Башҡортостандың рәсми теле итеп иғлан ителә. Автономия тураһындағы шартнамә проектына ярашлы, "эске автономиялы идаралыҡта һәм судта - башҡорт (төрки) теле, ә үҙәк властар һәм Рәсәйҙең башҡа автономиялы берәмектәре менән эш иткәндә рус теле рәсми тел булып тора. Үтенес хаттары, ялыуҙар, килешеүҙәр, иғландар һәм башҡа ҡағыҙҙарҙы рус йәки башҡорт телендә бирергә мөмкин".

Башревком ҡарары менән раҫланған Дәүләт телдәрен ғәмәлгә индереү тураһындағы шартнамәгә ярашлы, 1920 йылдың 24 мартында БАССР биләмәһендә башҡорт һәм рус телдәре дәүләт телдәре тип билдәләнә. Ә инде 1921 йылдың 1-4 июнендә үткән Советтарҙың II Бөтөн башҡорт съезы Башҡорт АССР-ы биләмәһендә башҡорт телен, рус теле менән бер ҡатар, тулы хоҡуҡлы дәүләт теле тип иғлан итә. Атап әйткәндә, унда шулай тип әйтелә: "Башҡорт ярлыларының дәүләт төҙөлөшөндә ҡатнашыуын еңеләйтеү маҡсатында, башҡорт телен рус теле менән бер кимәлдә дәүләт теле тип танырға. Уны мотлаҡ өйрәнеүҙе барлыҡ уҡыу һәм хәрби-уҡыу йорттарында ла индерергә. Был йәһәттән Халыҡ Мәғарифы Комиссариаты эшмәкәрлегенә айырым иғтибар йүнәлтеп, уға ярҙам итергә..."

1921 йылдың 6 июнендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы Рәйесе Шәһит Хоҙайбирҙин "Башҡорт телен рус теле менән бер рәттән БАССР-ҙың дәүләт теле тип иғлан итеү һәм телдәрҙе учреждениеларҙың эш башҡарыу өлкәһендә ҡулланыу тураһында"ғы Ҡарарға ҡул ҡуя. Был мөһим документ башҡорт теленең тотош республика биләмәһендә юғары статуста йәшәй башлауына ҙур этәргес яһай. Иң мөһиме, дәүләт ойошмаларының рәсми ҡағыҙҙар менән эш иткән хеҙмәткәрҙәрен башҡорт теленә өйрәтеү буйынса махсус курстар асыла, мәктәптәрҙә туған телде уҡытыуға иғтибар арта, китап нәшер итеү яйға һалына, яңы гәзит-журналдар донъя күрә. Йыйылыштарҙа, митингыларҙа, кәңәшмәләрҙә башҡортса сығыштар яңғырай башлай.

Был күренеш - башҡорт теленең яңы сифатҡа эйә булып, киң даирәгә таралыуы - ташҡын ваҡытында яҙғы һыуҙың йылға ярынан ашып, ашҡынып, әллә ҡайҙарға тиклем диңгеҙҙәй йәйелеүен хәтерләтә. Ошо тәүге көслө тулҡынды тыуҙырған Башҡорт Хөкүмәте ағзалары һәм зыялылар шул заманда иҫ киткес ҙур эш башҡарыуын баштарына һыйҙыра алдымы икән! Рәсәйҙә иң беренсе булып автономиялы республика төҙөүгә һәм башҡорт телен дәүләт кимәленә күтәреүгә өлгәшкән Әхмәтзәки Вәлиди, Харис Йомағолов, Шәһит Хоҙайбирҙин, Дауыт Юлтый кеүек ҡаһарман шәхестәргә (ә бит ул ирегеттәргә ни бары 25-30 йәш самаһы булған!) халҡыбыҙ мәңге рәхмәтле булып ҡаласаҡ, әлбиттә.

Бер быуат самаһы элек башҡорт теле милләтебеҙ зыялылары тырышлығы менән бына шулай Башҡортостанда, тимәк, Рәсәйҙә рәсми тел булараҡ танылыу ала. Әммә уҙған быуаттың 50-80-се йылдарында уның статусы кесерәйеп ҡала, хатта бик күп башҡорт балалары туған телендә белем алыуҙан мәхрүм ителә. 1990 йылдың 11 октябрендә Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүе туған тел яҙмышына ыңғай йоғонто яһаны. 1999 йылда ғәмәлгә ингән "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон нигеҙендә башҡорт теле йәнә дәүләт теле булараҡ нығытып ҡуйылды. Шул ваҡыттан алып тел тураһындағы ҡануниәтте тормошҡа ашырыу буйынса байтаҡ эштәр атҡарылды: Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағында "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды бойомға ашырыу буйынса комиссия төҙөлдө, уның топонимика һәм терминология буйынса ике хеҙмәте булдырылды, һәр ҡала һәм район хакимиәттәре ҡарамағында ошондай уҡ ойошмалар барлыҡҡа килде. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға иғтибар бирелә башланы, республика кимәлендә генә түгел, хатта ҡала-райондарҙа ла үҙаллы башҡортса гәзит һәм журналдар нәшер итеү юлға һалынды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башҡорт теленең беҙ һанап үткән даирәлә генә ҡулланылыуы уның йәшәү ҡеүәтен арттырыуға артыҡ булышлыҡ итмәй. Юҡҡа ғына ЮНЕСКО 2009 йылда башҡорт телен "Донъяның хәүеф аҫтында ҡалған телдәре атласы"на индермәгәндер. "Көсһөҙ" мөһөрө һуғылған туған телебеҙҙе нисек итеп юғалыуҙан ҡурсалап ҡалырға? Тел сәйәсәтендә иң беренсе беҙҙе бына ошо мәсьәлә борсорға тейеш. Башҡорт теле донъя телдәре араһында лайыҡлы урын алһын өсөн, беренсе сиратта, уның ҡулланыу даирәһен киңәйтергә кәрәк. Дөрөҫ, был хаҡта бик күп яҙабыҙ, һөйләйбеҙ, ләкин ыңғай үҙгәрешкә өлгәшә алмайбыҙ. Һуңғы йылдарҙа хатта шундай парадокс килеп сыҡты: башҡорт мәктәптәре һәм гимназиялары күбәйҙе, әммә саф башҡорт телендә аралашҡан уҡыусылар кәмене; башҡорт гәзит-журналдары ишәйҙе, ләкин уларҙы алдырып уҡыған ғаиләләрҙе "Ҡыҙыл китап"ҡа ғына индерергә ҡалды; һәр районда һәм ҡалала башҡорт ҡоролтайҙары төҙөлдө, тик йыйындар күп ерҙә... урыҫ телендә алып барыла. Ошо мәсьәләләрҙе күмәк көс менән хәл итмәһәк һәм башҡарма власть органдарында, исмаһам, рәсми ҡағыҙҙар менән эш иткәндә, башҡорт телен мотлаҡ ҡулланыуҙы ғәмәлгә ашырмаһаҡ, ЮНЕСКО-ның фараздары бер нисә тиҫтә йыл эсендә ғәмәлгә ашыуы ла ихтимал.

Хоҙайбирҙиндар, юлтыйҙар быуыны, үтә лә ауыр шарттарҙа башҡорт телен дәүләт бейеклегенә күтәреп, уны беҙгә изге мираҫ итеп ҡалдырған. Уларҙың васыятына тоғро ҡалып, туған телебеҙҙе ҡурсалау, үҫтереүҙе һәр башҡорт үҙ бурысы итеп ҡабул итһен ине. Туған телдең үҫеше башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ғына бәйле түгел, юғиһә, бәғзеләр шулай фекер йөрөтә. Тел яҙмышы - ул ил яҙмышы икәнен тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрәйек, йәмәғәт.

**Н. БУЛАТОВ.**
**Иглин районы.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1734 йыл** - күренекле рус географы И.К. Кирилов Рәсәйҙең Көнсығыштағы мәсьәләләре буйынса "Фараздар" тигән ҙур хеҙмәт әҙерләй. Фараздарҙың береһе - Орь йылғаһы буйында ҡала төҙөү. Был проект раҫлана һәм ошо бурысты атҡарыу өсөн Кирилов экспедиция начальнигы итеп тәғәйенләнә.

➔ **1735 йыл**дың авгусы - ауыр юл үтеп, экспедиция "Яйыҡ үрендәге Орь тамағына" килеп етә һәм Преображенский тауында Ырымбур (әлеге Орск ҡалаһы) крепосына нигеҙ һала. И.К. Кирилов арифметика һәм тәржемәселәр мәктәптәре аса. Кирилов крайҙың тәбиғи байлыҡтарына күп иғтибар бүлә. 1735 - 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарын баҫтыра.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Яңы кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡатындары бик оялсан була, бигерәк тә сит-ят кешеләр йәиһә үҙҙәренән олораҡ яңы туған-тыумаһаһы алдында. Был осраҡта улар һәр саҡта ла мөйөшкә боролоп, мөмкин булғанса йөҙҙәрен ҡапларға тырыша; ҡунаҡтар ултырышып бөтөп, тын ҡалғас, һәр береһен, беҙ алдараҡ яҙғанса, баш эйеп хөрмәтләй. Ололарға үҙҙәре башлап һүҙ ҡушмайҙар, мөйөшкә табан боролоп, тын ғына торалар. Бынан башҡа, башҡорт ҡатын-ҡыҙының яңы кейәүгә сыҡҡанын башындағы ҡашмау өҫтөнә уратып бәйләнгән төлкө йә башҡа төрлө малахайынан белеп була.

Башҡорттарҙың бала тыуыу һәм ерләү йолалары башҡа төркиҙәргә оҡшаш; әммә бала тәрбиәләүҙә айырма күп. Башҡорттар балаларын грамотаға һирәк өйрәтә, шуның һөҙөмтәһендә уларҙа абыз вазифаһын, башлыса, Өфө һәм Ҡаҙан өйәҙенән килеүсе татарҙар башҡара. Бәләкәй малайҙарҙы иң тәүҙә уҡ атырға һәм атта һыбай йөрөргә өйрәтһәләр, ҡыҙҙар мал ҡарарға һәм ҡул эштәренә өйрәнә.

Башҡорттарҙа үҙҙәренең йәшәү рәүешенә ярашлы, бәпестәр өсөн ҡайын ҡайырыһынан, уны көймә йәки кәмәгә оҡшатып һалып, ян-яғынан тал сыбыҡтары менән нығытып, сәңгелдәктәр яһала. Сәңгелдәктең баш яғынан, бәпестең күкрәк тәңгәле тура килгән урында, ике ҡабырғанан тыштан һәм эске яҡтан ике элмәк үткәрелә. Аяҡ яғынан да шундай уҡ ике элмәк ҡуйыла. Сәңгелдәктән осоп төшмәһен өсөн ошо элмәктәр менән бәпесте күкрәгенән һәм аяҡтарынан бәйләп ҡуялар. Ҡабырғаға беркетелгән талға ҡайыш йәиһә билбау тағып, уны ҡулбаш аша кейәләр. Шулай итеп, һыбай китеп барыусы башҡорт ҡатыны үҙенең бәпесен бер хәүефһеҙ үҙе менән йөрөтә һәм имеҙә ала; ат һөрөнөп киткән саҡта, йәиһә башҡа бер кинәт һелкетеп ебәргән мәлдә бәйләп ҡуйылған бәпес сәңгелдәктән осоп төшмәй.

Башҡорт туйҙарының, ваҡытты бик күңелле итеп үткәреүҙән тыш, беҙгә башҡа файҙаһы ла булды. Оло башҡорт йыйыны беҙгә төрлө хәбәрҙәр еткерҙе, һәм беҙ бында улар араһынан бик шәп мәғдән сәнәғәтселәрен таптыҡ, ә уларҙың иң абруйлыһы, Үмәр Ямышев исемле Исәт провинцияһы кешеһе, башҡорттар араһында билдәле мәғдән эҙләүсе булараҡ танылыу тапҡан. Беҙ уның һәм уның иптәштәренең кәңәшен тотоп, ғәҙәттәге юлды ҡалдырып, һыбай килеш айырым юлға сыҡтыҡ...

...Башҡорттарҙан айырылып киткәс, беҙ юлыбыҙҙы Урал буйлап дауам иттек, туҡтауһыҙ барған көслө ямғырҙар арҡаһында бәләкәй генә Урал йылғаларының да беҙҙең өсөн оло ҡаршылыҡҡа әүерелеүе ошо юлыбыҙҙа кисергән иң ҙур ҡыйынлыҡтар рәтендә булды. 10 саҡрымлап юл үткәс, Әй йылғаһына яҡынлаштыҡ, уның арьяғында оҙонлоғо 5 саҡрымға тиклем еткән, Үрәнге тип аталған (был атаманы автор "кленовый", тип тәржемәләй. - **Ред. иҫк.**), бигүк билдәһеҙ булмаған Урал арты һырты ята.

# ТОРМОШТО унда файҙалы

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһының билдәле журналисы, "Байыҡ", "Башҡорт йыры" исемле уникаль проекттар авторы Рита Өмөтбаева менән әңгәмә башлар алдынан Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылында йәшәүсе сәсән телле яҡташыбыҙ Әкрәм Ҡәйепҡоловтың махсус рәүештә уға арналған шиғри һорауын йүнәлттем:**

**Ғафуриҙар: "Беҙҙеке", - ти,**
**Йәнйегеттәр: "Минеке".**
**Дөрөҫ кенә әйт әле:**
**Рита, һин һуң кемдеке?**
**"Ритайым" - Гөлназдыҡы,**
**"Байыҡ", һылыу, һинеке!**

- Минең әсәйем Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылынан, унда йәшәүсе Солтангилдиндар нәҫеленән. Атайымдың ата-бабалары юрматы ырыуынан. Үҙемде тулыһынса Баймаҡ кешеһе, бөрйән ырыуы вәкиле итеп тоям. Әкрәм ағай нишләп ул һорауҙы бирҙе икән: баймаҡлығым маңлайыма яҙылған даһа.

**▸ Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары аҙағында Ҡорған өлкәһендәге башҡорт ауылдарына барып ҡайтыусылар бик ҡыҙыҡлы бер күренешкә тап булыуы тураһында һөйләгәйне. Өлкәлә сәнәғәт предприятиелары үҫешмәгәс, был хәл урындағы халыҡтың йәшәйешендә лә сағылыш тапҡан. Мәктәптәренең тәҙрәләрендә ҡорғандары булмаһа ла, урындағы милләттәштәребеҙҙең өҫтөндә милли кейем икән. Шунан беҙҙән барыусылар уларҙан: "Ниңә тәҙрәләрегеҙҙә ҡорған юҡ? Уның ҡарауы, милли кейем өсөн мөмкинлек тапҡанһығыҙ..." - тип уйынлы-ысынлы итеп һораған. "Беҙҙең рухты ҡорған түгел, милли кейем һаҡлай бит", - тип яуап биргән Ҡорған башҡорттары.**
**Был миҫалды нимәгә килтерәм һуң? Хәҙерге заманда донъяла һәм беҙҙең илдә уй эйәреп етмәҫлек үҙгәрештәр бара. Был үҙгәрештәр дәүләтара мөнәсәбәттәргә лә, сәйәсәткә лә, сәнәғәткә лә берҙәй үк ҡағыла. Беҙ иһә, был үҙгәрештәргә артыҡ тығылмайынса, өҫтөнә милли кейем кейгән ҡорғандар шикелле, ошо болғауыр заманда ниндәйҙер икенсе ҡиммәттәргә табынып, икенсе төшөнсәләр менән йәшәгән һымаҡбыҙ. Беҙ атай-олатайҙарыбыҙ меңәр йылдар һуҙымында барлыҡҡа килтергән рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлауҙы, сәнғәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереүҙе тәүге планға ҡуябыҙ. Шулай түгелме?**

-Һүҙемде ерлек төшөнсәһенән башларға теләр инем. Әгәр ҙә мин Баймаҡта тыуып үҫмәй, әйтәйек, Тәтешлелә тыуған булһам, баймаҡтар өсөн мөҡәддәс төшөнсәләрҙе аңламаған да булыр инем. Кешенең тыуып-үҫкән ерендәге уны уратып алған мөхите уға ифрат ҙур йоғонто яһай. "Байыҡ"ҡа килгән бейеүселәрҙә лә мин был йоғонтоно ныҡ һиҙәм. Әйтәйек, Әбйәлил бейеүселәре Учалы бейеүселәренән ныҡ айырыла. Мөхит айырымлығы шулай уҡ туйҙарҙа ныҡ сағыла. Беҙҙең яҡтағы туйҙарҙа "Килен һөйөү" йолаһы ҙур әһәмиәткә эйә. Күп кенә башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙә хатта был йоланың барлығы хаҡында ла белмәйҙәр. Күп кенә урындарҙа башҡорт йәштәренең туйҙары милли йолаһыҙ - "ҡоро" көйө, "Әсе!" тип ҡысҡырыуҙар менән үтә. Нисектер, ул туйҙар ашау-эсеү өсөн, бүләктәр бирешеү өсөн генә үтә кеүек. Мин, мәҫәлән, үҙебеҙҙең яҡта үткән туйҙарҙан күңелем байып, үҫеп, рухым күтәрелеп ҡайтам.

Беҙ, асылда, күңел менән йәшәйбеҙ. Әммә беҙгә аңлы йәшәү етешмәй, анализ юғыраҡ. Күптәр балаһы урта мәктәпте тамамлаһа, шул еткән, тип фекер йөрөтә. Беҙҙе өлкәндәр күберәк тыйып өйрәткән, үҙаллы фекер йөрөтөргә, эш итергә өйрәтмәгән. Һөҙөмтәлә тәбиғәт тарафынан бирелгән, тыумыштан һәләтле балаларҙың күбеһе үҙенең һәләтен үҫтерә алмай, юғалып ҡала. Был хәл тик сәнғәткә һәм мәҙәниәткә генә ҡағылмай, йәшәйештең һәр тармағында шулай.

**▸ Аңлы, тойғоло йәшәү, тигәндән, "Байыҡ" бейеү конкурсында сығыш яһаған профессиональ бейеүселәргә ҡарағанда, халыҡсан башҡарылғандары рухыма нығыраҡ тәьҫир итә. Мин ундай сығыштарҙан һуң рухи балҡыш кисереп, тәрән уйҙарға биреләм. Бында ҡаныбыҙға һалынған аң хаҡында һүҙ алып барырға мөмкиндер. Ғөмүмән, нимә һуң ул рух? Тойғомо, аңмы? Минеңсә, ул тойғо, күңел менән аңдың, фекерҙең синтезылыр. Тимәк, беҙҙең аң менән йәшәү һәләтебеҙ ҙә үҙенсәлекле мәҙәни код менән ҡаныбыҙға һалынған. Һин әйткән аңлы йәшәргә ынтылышыбыҙ ҙа шул уҡ кодта. Шулай түгелме?**

> ***РИТА ӨМӨТБАЕВА:***
> *Ниндәйҙер яңы кеше менән танышһам, уны бейетеп ҡарағым килә башлай. Сөнки шул бейеүҙә уның характеры тиҙерәк сағылыр ине һымаҡ.*

- Мин ошо конкурс башланғандан алып 500-ҙән ашыу бейеүсенең сығышын ҡарағанмындыр. Күпме генә ҡараһам да, һыуһыным ҡанмай. Кеше хоккей, футбол ҡарап, нисек допинг алһа, минең өсөн бейеү шундай әһәмиәткә эйә. Мин, ахыры, бейеү "наркоманы". Әгәр ҙә бейеүселәр араһында халыҡсан оҫталар килеп сыҡһамы, ул саҡтағы кисерештәремде аңлатыр өсөн һүҙҙәр таба алмайым. Әхмәр ағай, һин бит "Байыҡ" конкурсын башлап ҡына торғанда, башҡорт бейеүендә ат тояғы тауышы ишетелергә тейеш, тип әйтеп, беҙҙең алға бурыс ҡуйғайның. Был фекерегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Был талапты конкурстың баһалама ағзалары, бигерәк тә Ратмир ағай Бәҙретдинов яҡшы тоя. Ана шул тояҡ тауышы үҙемдең йөрәгемә лә мәңгелеккә уйылды. Шул тауыш ишетелһә, тәндәр зымбырҙап китә. Ниндәйҙер яңы кеше менән танышһам, уны бейетеп ҡарағым килә башлай. Сөнки шул бейеүҙә уның характеры тиҙерәк сағылыр ине һымаҡ.

Беҙ тәбиғи хистәр менән йәшәйбеҙ. Ҡайһы ваҡыт шул хистәрҙең ҡорбаны ла булабыҙ. Шуға күрәлерме, йәшәйеш аңы беҙгә хаталар аша ғына килә.

**▸ "Аҡ тирәк - күк тирәк" проектын эшләгән Рита менән "Башҡорт йыры", "Байыҡ" проекттарын тормошҡа ашырған Рита араһында ниндәй айырма бар? Ул ошо ваҡыт арауығында ниндәй үҫеш кисерҙе? Шул арала һин радиола, Йәштәр эше буйынса дәүләт комитетында, матбуғат министрлығында эшләп алдың, шунан кире телевидениеға ҡайттың...**

- "Аҡ тирәк - күк тирәк" миңә аңлы тормошҡа килергә ярҙам итте. Унда ҡатнашҡан кешеләрҙең фекерләүе тормош хаҡындағы еңел-елпе уйҙарымды үҙгәртергә ярҙам итте. Уйлана башланым. Бер ҡасан да булмағанса психологик, философик, дини китаптар уҡырға тотондом. Ток-шоу эшләү яйлап рухи ҡиммәттәребеҙгә иғтибар иттерҙе. Бер осор фитнесҡа, бер осор йогаға йөрөп алдым, саңғыға баҫтым. "Аҡ тирәк - күк тирәк" үҙ-үҙемде бер йоҙроҡҡа туплларға, холҡомдо үҙгәртергә, кешеләр менән мөнәсәбәтемде үҙгәртергә, әүҙемерәк булырға булышлыҡ итте. "Байыҡ"ты телевизорҙан ҡарағанда ғына шулай шыма һәм еңел генә үтә кеүек күренә, ә уның артында ниндәй мәшәҡәтле эш ятҡанын күптәр белмәй ҙә. Бер миҙгелдә беҙ алтмышлаған бейеүсе менән ун бишләгән тапшырыу яҙабыҙ. Шул уҡ ваҡытта һинең командаң сәғәт механизмы һымаҡ эшләп торорға тейеш. Кемделер тәнҡитләргә, кемделер хупларға, баһалама ағзаларының да күңелен күрергә кәрәк. Беҙҙә матур проекттар башлаусылар күп булды, әммә күбеһенең командаһы ышанысլы булмағас, нисек башлаһалар, шулай тамамланылар. Телевидениела бер ваҡытта ла бер үҙең генә эшләп булмай.

Элек мин яндырай, бер ҡатлыраҡ инем. Тапшырыуҙа һорауҙарымды туранан-тура биреп, яуабын да үҙем һымаҡ шундуҡ биреләүен талап иттем. Әйтәйек: "Апай, ағай, бына был мәсьәлә шулай-шулай булған, эйеме?"- тип, үҙем һорауын да, яуабын да бирә инем. Хәҙер шул етешһеҙлектәремдән арынырға, башҡалар фекеренә нығыраҡ ҡолаҡ һалырға өйрәнәм.



**▸ "Байыҡ"конкурсы барғанда мин күп кенә мәсьәләләрҙә һинең яҡлы, Рита. Әйтәйек, шундай ситуация: конкурста ҡатнашыусының бейеүе минең рухыма йоғонто яһай, ҡанымда ойоған боронғологомдо уята. Шул уҡ кешегә, бейеүен башҡарғанда ҡулдарын шулайыраҡ йөрөттө, башын былайыраҡ тотто, тип, баһалама комиссияһы ағзалары түбән бал ҡуйһа, йән көйә башлай. Тап шундай мәлдә һин дә бейеүсене яҡлай башлайһың. Шуға күрә лә, тик 50 бал**

✔ *Ул: "Мин башҡорт түгелмен, әммә мин башҡорттоң күңелен уның бейеүе аша аңлайым", - тигәйне. Ул беҙҙең сараға йыл һайын килә торғайны. "Байыҡ"ты урыҫтар ҙа, татарҙар ҙа, сыуаштар ҙа яратып ҡарай.*



**йыйғандар ғына ниндәйҙер турҙы үтә ала, тигән конкурс шарты менән килешеп тә бөтмәйем. Бәлки, бейеү ветераны Ратмир ағайға кемделер үткәреү йә үткәрмәү буйынса "Аҡһаҡал хоҡуғы" бирергә кәрәктер?**

- Ратмир ағай оло тормош тәжрибәһенә эйә булараҡ, бейеүсене теория күҙлегенән генә ҡарамай. Ул жюри ағзаһы ғына түгел, ә күңеле менән ҡабул итеүсе зауыҡлы тамашасы ла. Ул иң элек бейеүсенең күҙҙәренә, энергетикаһына иғтибар итә. Шул уҡ ваҡытта конкурста ҡатнашыусыны теория күҙлегенән үткәргән башҡа жюри ағзалары ла кәрәк. Беҙ шулай ҙа барыһын да төшөрөп ҡалдырырға тырышмайбыҙ, кемеһенәлер номинация бирәбеҙ. "Байыҡ"ҡа бишенсе тапҡыр килеп, урын алып ҡайтыусылар ҙа бар. Йәндә ҡырған күренештәр ҙә, конкурсҡа өс көн ҡалғас, бейеү ҡуйып: "И-ха-ха", - тип сәхнәгә килеп сығыусылар ҙа бар. Ундайҙарҙы бөтөнләй күрһәтмәйбеҙ.

**бәйле. Мин уны "Байыҡ" тигән ҡиссамда шулай билдәләнем: "Донъяға яралғандан бирле эйәр өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән. Шуға күрә уны ҡуҙғатыр өсөн дә бейеүебеҙҙә тояҡ тауышы ишетелергә тейеш. Ат тояғы тауышы ишетелдеме - башҡорттоң да йөрәге дөпөлдәп, ҡупҡалийый башлай. Был - атай-олатайҙарыбыҙҙың боронан ҡалған аманаты…"**

- Гала-концертҡа мин икенсе республикаларҙың бейеү ансамблдәрен саҡырырға тырышам. Мохтар Кудаев, Ҡабарҙы-Балҡар дәүләт ансамбленә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, башҡорт бейеүе хаҡында китап яҙа ине, тамамлап өлгөрмәне, ҡапыл вафат булды. Ул: "Мин башҡорт түгелмен, әммә мин башҡорттоң күңелен уның бейеүе аша аңлайым", - тигәйне. Ул беҙҙең сараға йыл һайын килә торғайны. "Байыҡ"ты урыҫтар ҙа, татарҙар ҙа, сыуаштар ҙа яратып ҡарай. Шылтыратып, тәҡдимдәрен, кәңәштәрен әйтәләр.

ғыҙ: башҡорт бейеүе бына нисек булырға тейеш. Мостафа ағай Ҡотдосов, Рәсих ағай Хәмитовтар бейергә төшһә, һоҡланып туйғыһыҙ. Улар аяҡтары менән генә түгел, яурындары менән дә бейей. Тәүге фекергә килгәндә, килешәм: бейеүҙә һыныҡ-булмышың ҡатнашҡас, йырлағандағы һымаҡ тауышты үҙгәртә, һығылмалы итә торған акустик аппаратура булмағас, алдап булмайҙыр ул...

**▸ Мин, мәҫәлән, беҙҙең ауылдағы ике бейеүҙе "Байыҡ"та күрергә теләр инем. Беҙҙә бәләкәй саҡта өләсәйҙәр, ҡартәсәйҙәр "Гиңгерләк"кә бейетте. Гингерләк - ауыҙ гармуны тип атала. Икенсе бейеү - "Ай, бикәсем Мәликә". Уны әсәйем мәрхүмә менән Сәрүәр апай Хәмитова ҡунаҡтарҙа бейей торғайнылар. Атайымдың бер туған ағаһы Басир олатайым көҙгәнән тура ғына тотоп, тик аяҡтары һәм ҡулдары менән бейер ине…**

- Мин уларҙы килһе йылға "Байыҡ"ҡа алып сығам, Әхмәр

# ТЫҢЛА...

## нәмәләр бик күп

**▸ Сәйфулла ағай Дилмөхәмәтовтың бик ҡыҙыҡлы һүҙҙәре булған. Ул: "Түңгәүерҙәр менән - ҡурайҙа, үҫәргәндәр менән - йырҙа, бөрйәндәр менән бейеүҙә ярышма", - тигән. "Башҡорт йыры" менән "Байыҡ"ты ойоштороусы булараҡ, уның был һүҙҙәренә нисек ҡарайһың?**

- Мин бындай бүленеште Урал тауының һыҙаты рәүешендә күҙ алдына килтерәм. Һаҡмар ағышы буйынса Рәшиҙә Туйсинанан башлап Мөхәмәт Иҙрисовҡа тиклем - бейеүселәр, Ишмулла Дилмөхәмәтовтан Мөхәммәтйән Ҡаҙаҡбаевҡа тиклем - ҡурайсылар, Мөхәммәтйән Ҡаҙаҡбаевтан Сөләймән Абдуллинға тиклем - йыраусылар. Һәр бер халыҡ йыры хаҡында тарихи-музыкаль фильм төшөрөргә була. Киләсәктә, Алла бойорһа, уны эшләй алырлыҡ режиссерҙарыбыҙ буласаҡ. Улар әле үк күренә башланы. Мин, мәҫәлән, Алдар батыр менән Петр Беренсенең осрашыуы тураһында фильм төшөргөм килә.

**▸ Башҡорт бейеүенең мәҙәни коды лакмус ҡағыҙы кеүек. Ул милли асылынан аҙашып йөрөгәндәрҙе башҡарылған секунд-минутында уҡ асылына елтерәтеп ҡайтарыр кеүәткә эйә. Былтыр үткән конкурстың Гала-концертына килеүсе бер яҡташыбыҙ ҙа үҙенең башҡорт бейеүенән алған рухи балҡышы хаҡында бәйән иткәйне. Әлбиттә, был мәҙәни код юғарыла һин әйткән ат тояғы тауышына**

Мин ҡатыны сыуаш, ире урыҫ милләтенән булған бер ғаиләне беләм. Улар "Байыҡ"тың һәр тапшырыуын ҡарап, башҡорт бейеүен аңлар өсөн башҡорт телен аңлау ғына етмәй икән - шуны беләм хәҙер.

**▸ Йыр сәнғәтендә, моңоң булмаһа ла, замандың техника мөмкинлегенә ышыҡланып сығыш яһарға булалыр. Ундайҙарҙың сағыу өлгөләре - Владимир Высоцкий менән Андрей Миронов. Андрей Миронов, мәҫәлән, тыумыштан "колағына айыу баҫҡа ла", ритм ыңғайына ҡыҫҡырып, шиғыр тексын әйтеп, тамашасы уның башҡарыуын йыр итеп ҡабул иткән. Высоцкий ҙа гитара аккордтарына тап килтереп "шиғыр һөйләп йырлай". Башҡорт эстрадаһында ла ундай "йырсылар" юҡ түгел. Хатта бер шиғыры ла булмаған кеше лә "халыҡ шағиры" булып китер заманда йәшәйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта бейеүҙә улай итеп алдап булмай. Мин, мәҫәлән, нисек кенә тырышһам да, бейергә өйрәнә алманым. Ошо урында яҡташыбыҙ Әкрәм ағай Ҡөйөпҡоловтың тағы бер дөғәһен килтереүҙе урынлы һанайым: "Бер оло кешенән ишеттем. "Әлек ҡыҙҙар тыпырҙатып бейей торғайны, хәҙер шыуып тик йөрөйҙәр. Егеттәр бейеһә, бот күтәреп ырғый башлайҙар. "Байыҡ" менән балетты бутамағыҙ, зинһар…"**

- Эйе, беҙҙең халыҡ ойотоп ҡына бейегән. Әхмәр ағай, үҙегеҙҙең ауылды ғына алы-

ағай, мотлаҡ рәүештә. Халыҡ араһындағы бындай бейеүҙәр, бәлки, онотолмаҫ та ине: мәктәптәрҙә бейеү ансамблдәре юҡ бит хәҙер. Чечендарҙа, мәҫәлән, бейеү аша тәрбиәүи эш алып барыла.

**▸ Тәрбиә, тигәндән, интеллигентлыҡҡа уҡып өйрәнеп буламы? Әллә ул тәрбиә һөҙөмтәһеме, әллә тәбиғи һәләтме?**

- Тәбиғи һәләттер ҙә, тәрбиә һөҙөмтәһе лә. Уҡып ҡына интеллигент булып булмайҙыр.

Өс юғары белемгә эйә булып та, хатта ябай корпоратив мәҙәниәттең ни икәнен белмәгән, үҙенең ҡул аҫтында эшләүселәргә екерергә генә яратҡан етәкселәр бар. Шул уҡ ваҡытты мин белгән бер һауынсы апай ғүмере буйы һары май, дебет шәл бәйләп һатып, балаларына юғары белем, тәрбиә-әҙәп биргән. Уның балалары - ысын мәғәнәһендәге интеллигенттар. Беҙҙең шундай үҙен интеллигент тип һанаған ағайҙар ҙа бар. Улар һәр ваҡыт милләткә яҡлап ҡыҫҡыра, ә үҙҙәренең ҡатындары башҡа милләттән, балалары башҡортса бер ауыҙ һүҙ белмәй. Улар кем була инде?..

**▸ Халыҡ ижадын өйрәнеүселәр "Байыҡ"тың ябай ғына бейеү түгел, ә сәғәттәр буйына һуҙылған композиция булыуы хаҡында яҙа. Һин уны нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһең?**

- Мин әле башҡорт бейеүенең ысын асылындағы үҙенсәлектәрен тергеҙергә тигән хыял менән йәшәйем. Байыҡ сә-

сән шәхесенә, ул йәшәгән заманға бәйле булырға тейештер ул композиция. Ҡайны ваҡыт тотош Гала-концертты шул темаға арнағым килә. Был халҡыбыҙ тарихының ҙур өлөшөн сағылдырған философик композициялыр ул, уның бер бәләкәй генә өлөшө - "Байыҡ" бейеүе. Тик беҙ ҡайны ваҡыт популяр булабыҙ, тип, актуаль темаға тотоноп та харап булабыҙ. Күп нәмә режиссерҙан тора. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында башҡорт темаһына спектаклдәрҙең булмауына ла эс боша. Марсель Ҡотоев һымаҡ тауыштар ҙа, шанлы тарихыбыҙға бәйле тематика ла бар, тик либретто, музыка яҙыусы, шуларҙы ойоштороусы юҡ.

**▸ Хәҙер бит һәр бер композитор үҙе шиғыр, һәр бер шағир үҙе йыр яҙып, шуны үҙе үк йырлап маташа.**

- Шулай шул: шағирҙар бар һәм шиғырсылар, йырсылар һәм йырлаусылар бар.

**▸ Вәкил Хажин гәзиттәге бер сығышында: "Беҙҙә мәҙәниәт ҡотҡарасаҡ", - тип әйткәйне...**

-Беҙ әле 2020 йылда беҙҙә үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнәбеҙ. Ошоға әҙерлек йөҙөнән быйылғы "Байыҡ"ҡа фольклор төркөмдәре күп килде. Беҙ донъянан килгән ҡунаҡтарға, милли кейемдәрҙән тыш, мифтарға, эпостарға нигеҙләнгән мюзиклдар, музыкаль спектаклдәр, композициялар күрһәтергә тейешбеҙ. Һәр хәлдә, унда ошо йүнәлештәге тематика булыуы мотлаҡтыр. Полад Былбыл улы Әҙербайжандың мәҙәниәт министры булып киткәс, ауылдарҙа легендаларҙы, риүәйәттәрҙе өйрәнеп, шуларҙы профессиональ кимәлгә күтәрә. Либреттоларға, милли оркестрҙарға шул материалды нигеҙ итеп ала. Был шәхес милләте өсөн ҙур эш эшләгән. Беҙҙең тамашасыға ла үҙебеҙҙең ерлектәге балет кәрәк.

**▸ Тағы ла ниндәйҙер яңы проекттар тураһында уйланғаның юҡмы һинең?**

-Әле ҡурай тураһында уйланып йөрөйөм. Ябай ғына концерт форматында күп халыҡты йәлеп итеп булмай хәҙер. Хәҙерге заман телевидениеһының бар мөмкинлектәрен файҙаланып, яңы проект эшләргә кәрәк. Һәр хәлдә, был проекттың халҡыбыҙҙың мәшһүр ҡурайсылары исемдәренә һәм үлемһеҙ көйҙәребеҙгә бәйле булыуы мотлаҡ. Ул дәрес һымаҡ та, ярыш һымаҡ та булырға тейеш, тип уйлайым.

**▸ Минеңсә, Юлай ағай Ғәйнетдиновтың ҡурайсылар бәйгеләрендә ҡулланған билет алып көй башҡарыу формаһы ла бында урын алырға тейештер, тип уйлайым..**

- Мотлаҡ. Конкурста ҡатнашыусыларҙың көйҙәрҙең тарихын белеүенә лә урын бирелергә тейеш был проектта. Өҫтәп тағы шуны әйтәм: ул ябай концерт формаһында ғына булһа, отошло булмаясаҡ. Проектта быуындар күсәгилешлелеге лә, эстафета тапшырыу ҙа булыуы зарури.

**▸ Һин тормош менән ниндәй мөнәсәбәт ҡороп йәшәйһең?**

- Тормошто тыңлай белергә кәрәк. Беҙ уны тыңлай белмәйбеҙ, әгәр ҙә уны тыңлай белһәң, файҙалы нәмәләр күп унда.

**▸ Һиндә режиссер ҡарашы көслө. Бәлки, һиңә, ысынлап та, үҙебеҙҙең ерлектә берәй фильм төшөрөргә кәрәктер…**

- Ҡараш бер нәмә, режиссерлыҡҡа ҡараш ҡына етмәй, махсус уҡырға кәрәк.

**▸ Һин хәҙерге йәштәрҙең ниндәй сифаттарын ыңғай баһалайһың?**

- Беҙ элек тыуғанбыҙ, улар белеп тыуа. Хәҙерге йәштәрҙе бер нәмә менән дә аптыратып, ғәжәпләндереп булмай. Беҙ һәр бер яңылыҡты күреп аптырай, ғәжәпләнә, ҡурҡа торғайныҡ. Бәлки, был яҡшылыр, йәштәр һәр нәмәне "шулай булырға тейеш" тип ҡабул итә. Хәҙерге йәштәр бөтөнләй эсмәй тиерлек, спорт менән шөғөлләнә, сәләмәт тормош алып бара. Беҙҙең заманда аңҡылдашып, ғауылдашып ҡунаҡҡа йөрөү бар ине. Хәҙер эсеү модала булмағас, йәштәрҙең тормошонда былар күҙәтелмәй. Хәҙер иһә йәштәр саңғыла йөрөй, ҡыҙҙар фитнесҡа, егеттәр спортзалға бара. Психологияла "манипулятор" тигән төшөнсә бар. Бөгөн шундайҙар күбәйҙе. Улар кеше холҡоноң иң нескә урындарын белеп эш итәләр. Мәҫәлән, аҡса яратҡандарҙы - "пирамидалар" уйынына, ихтыяры булмағандарҙы - "секталарға", милли үҙаңы түбән булғандарҙы "милләтселеккә" йәлеп итәләр. Манипуляторҙар йәмғиәттәге иң ҡурҡыныс һәм оҫта ораторҙар. Шуларҙан һаҡ булһын йәштәр.

**▸ Традицион дин төшөнсәһен нисек аңлайһың?**

- Был бейеү сәнғәтендәге кеүек: халҡыбыҙ нисек бейегән, беҙ ҙә шулай бейергә, шул нигеҙгә таянып бейеү сәнғәтен үҫтерергә бурыслы. Беҙҙең өсөн традицион дин - ҡартатай-ҡартәсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ тотҡан дини йола. Тәрбиәле, әҙәпле, намыҫлы, сабыр дин. Мин әлегә намаҙҙа түгелмен. Әммә Аллаһы Тәғәләгә һыйынып йәшәйем...

**Әйткәндәй, әле генә Рита Рисхат ҡыҙын "Ҡурай" музыка каналының етәксеһе итеп тәғәйенләнеләр. Уның был канал эшен дә телевизор ҡараусылар зауҡына, талабына тап килерлек итеп ойоштороуона, "Башҡорт йыры", "Байыҡ" проекттарын артабан да гөрләтеп дауам итеренә, тағы әле күпме яңы проекттарға башланғыс һалырына ышаныс ҙур. Уңыштар уға!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ТУҠТА, МӘЛ!












*"Башҡорт милли кейеме көнө" байрамынан.*

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ДОНЪЯ СӘНҒӘТЕНДӘ...

## беҙҙең дә үҙ урыныбыҙ бар

**Һәр халыҡтың үҙенә генә хас булған, уны башҡалар араһында айырып күрһәтә торған милли мәҙәниәте бар. "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә, РФ Мәҙәниәт министрлығы, БР Башлығы Гранты ярҙамында быйыл баш ҡалабыҙҙа 18-се тапҡыр үткәрелгән "Урал моңо - 2016" Халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивале лә этник музыка өлгөләре менән таныштырыу йәһәтенән иң күркәм сара булды. Туғандаш халыҡтарҙың телен, йолаларын, кейемен, сәнғәтен өйрәнеү һөҙөмтәһендә беҙ тағы ла бер-беребеҙгә яҡынаябыҙ, бер-беребеҙҙе тағы ла яҡшыраҡ аңлайбыҙ.**

"Ер шарының картаһына ҡараһаң, Өфө - төрки донъяһының үҙәге икәнен күрәбеҙ. Шунын өсөн дә "Урал моңо" беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә иң төп һәм иң яҡын ижади бәйге булып тора", - тигәйне журналистар менән осрашыуҙа БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев ҡунаҡтарҙы сәләмләп. Ысынлап та, төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәте, ғөмүмән, этник музыка бик ҙур ҡыҙыҡһыныу уята тамашасыла. Шуға ла был сараны Өфө халҡы көтөп ала һәм һәр ваҡыт залдар шығырым тулы була.

Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Байрас Ишбирҙин әйтеүенсә, быйыл конкурста 6 илдән, Рәсәйҙең 10-дан ашыу төбәгенән бөтәһе 15-тән ашыу милләт вәкиле ҡатнашҡан. Конкурс тарихында икенсе тапҡыр - гагауздар, беренсе тапҡыр долгандар килде. Долгандар бөгөн Таймырҙа яҡынса 6 мең тирәһе - донъяла бөтәһе 8 мең тирәһе иҫәпләнә. Быға тиклем Үзбәкстандан ҡарағалпаҡтар ҡатнашҡаны булһа ла, үзбәктәр сығыш яһағаны юҡ ине. Үзбәк ҡыҙы Мөслимә Алиева беренселәрҙән булып Башҡортостанға моңлойырлы күпер һуҙҙы һәм бәйгелә йырсылар араһында икенсе урынға лайыҡ булды. "Был урын миңә Гран-приға ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк, шул тиклем көтөлмәгән хәл булды. Хәҙер мин ошо бәйгенең, башҡорт халҡының йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек итеп эшләргә бурыслымын", - тине ул беҙҙең менән аралашҡанда.

Милли йолаларға, туған телгә, тарихҡа һаҡсыл ҡараш, башҡа мәҙәниәттәргә ихтирам, ҡунаҡсыллыҡ кеүек сифаттарҙы быуаттар дауамында үҙ күңелдәребеҙҙә һаҡлай алыуыбыҙ ҙа берләштерә беҙҙе, тигән фекергә киләһең бындай байрамдарҙа. "Урал моңо" ысын мәғәнәһендә моң, йыр, ижад һәм, әлбиттә, йәшлек байрамына әүерелде. "Бында берәү ҙә ярышырға килмәй, беҙ бында үҙ мәҙәниәтебеҙ менән таныштырабыҙ", - тигәйне жюри ағзаһы, Үзбәкстандың халыҡ артисы, йырсы һәм композитор Мансур Ташматов башта уҡ. Сәйәси тотороҡһоҙлоҡ ваҡытында мәҙәни бәйләнештәр өҙөлөп тә тора һуңғы мәлдә, шуға ла төрки телле халыҡтарҙың сәнғәтендә ниндәй үҙгәрештәр бар, улар ниндәй юҫыҡта үҫешеүе барыһы өсөн дә ҡыҙыҡ булғандыр, моғайын. Бәйге ошо һорауҙарға ла яуап бирҙе. Алтайҙың билдәле өзләүсеһе, Гран-при яулаусы Добрыня Сатин милли уйын ҡоралдары икилиҙа уйнап, үҙе ижад иткән "Шаман хаҡында легенда" башҡарҙы. 23 йәшлек Добрыня үҙе профессиональ музыкаль белемле, ятаған, топшур, ҡумыҙҙа уйнай белә, урындағы филармонияла эшләй һәм башҡорт музыка һәм йыр сәнғәтенә лә юғары баһа бирҙе: "Беҙҙең ерлектә боронғо шамандарҙың донъяның өс ҡатына сәйәхәте тураһында тарихтар күп һаҡлана. Шаманлыҡ - кешелек менән бер мәлдә үк барлыҡҡа килгән мәҙәниәт төрө. Ниндәй заманда йәшәһәк тә, халҡыбыҙ тарихындағы был дәүерҙе оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Ошо тарихтарҙы музыка менән ҡушып, сәхнә вариантын эшләп алып килдем. Башҡорт ҡалаһы Өфөнөң бик матур тәбиғәтенә хайран ҡалдым, беҙҙең төрки телле халыҡтар һәр ваҡыт йәшәү өсөн ҡулайлы урындарҙы - йылға буйҙарын һайлап ултыра белгән. Йәшеллеккә күмелеп йәшәйһегеҙ, ата-бабаларығыҙ кеүек, һеҙ ҙә тәбиғәт менән гармонияла икәнегеҙҙе күрәм. Туғандаш халыҡтар булыуыбыҙ менән ғорурланам, кешеләр бында нурлы йөҙлө, изге күңелле икән. Иң һоҡландырғаны - милли сәнғәт юғары кимәлдә үҫешкән, боронғоса башҡарыу мәктәбе юғалмаған".

Конкурстың кимәле лә йылдан-йыл артыуын билдәләне ҡатнашыусылар. Ойоштороусыларҙың гел дә бер яңылыҡ уйлап табыуы ла матур йолаға әүерелгән хәҙер. 1995 йылда "Урал моңо" бәйгеһенә беренселәрҙән булып Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһынан "Алмасты" төркөмөн алып килеп, шул рәүешле бәйгегә халыҡ-ара статус биргән композитор, жюри ағзаһы Музафар Этчеев быйыл 13-сө тапҡыр йәштәрҙең ижадына баһа бирҙе. Уға Гала-концерттың асыҡ һауала үтеүе бигерәк оҡшаны: "Ике йыл элек Гала-концерт Салауат Юлаев майҙанында үткәндә, шунан да артыҡ аптырата алмаҫ башҡорт дуҫтар, тип уйлап хаталанғанмын. Быйыл тағы ла яҡшыраҡ урын тапҡандар. "Ете ҡыҙ" һәйкәле эргәһендә шыбаға тотошҡанда уҡ уның иҫ киткес һағышлы тарихын ишетеп, ете ҡыҙҙың һығылмалылығын бронзала һынландыра алыу оҫталығын күреп тетрәнеү кисергәйнек инде. Ошо тойғо бәйге барышында ҡабат-ҡабат йөрәктәрҙе һыҙландырҙы. Шундай ҙур сараға эләктек, симфоник төн дә, кино төнө лә, ҡурай фестивале лә ваҡытты файҙалы үткәрергә мөмкинлек бирҙе. Башҡорт ҡурайы минең өйөмдә лә бар, мин унда уйнарға өйрәнергә тырышам. Конкурста ҡатнашыусыларға килгәндә, бик көслө башҡарыусылар булды. Үзбәкстан, Әзербайжан, Ҡырымды айырым әйтеп китер инем..."

Жюри рәйесе, композитор Урал Иҙелбаев та башҡарыусыларҙың да профессиональ кимәле үҫеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Быйыл "Урал моңо" номинация йәһәтенән дә үҙгәрештәр кисерҙе: "Элекке йыл "Йор үҙән" фестивалендә инструменталь төркөмдәрҙең күп булыуын күреп, уларға үҙҙәрен ҡайҙалыр күрһәтергә мөмкинлек тыуҙырырға кәрәк, тип уйлағайным. Шуға ла был юлы солист-йырсыларҙан тыш, вокаль-инструменталь төркөмдәр һәм солист-инструменталистар айырым ҡатнашты. Әлегә башлыса Башҡортостандан төркөмдәр булды, уларҙың ижады мине бик ҡыуындарҙы, эҙләнеү өҫтөндәләр, уларға был юлда туҡтап ҡалмаҫҡа кәңәш итер инем. Халыҡ ижады, халыҡ көйҙәре шул тиклем бай бит ул. Уны мин таҙа шишмә итеп күрәм. Уны кемдер күрә, кемдер иғтибар итмәй үтеп китә. Ә этник музыка ошо шишмәләге саф һыуға ниндәйҙер форма биреп, тәҡдим итеү. Уны шул рәүешле ҡабул итеүе еңелерәк тамашасыға, бигерәк тә башҡа милләт кешеләренә. Шулай уҡ Әзербайжан музыканттары үҙҙәренең музыка ҡоралдарын яҡшы күрһәтә алды. Музыка ҡоралдарында уйнаусылар номинацияһы шулай уҡ мөһим, сөнки беҙҙең ҡурайҙы ла халыҡ-ара конкурстарға сығарырға кәрәк".

**Шулай итеп...**

**Шуныһы ҡыҙыҡ: бөтөн кешелек тарихын, йәиһә бөгөнгө заманды алып ҡараһаҡ, халыҡтарҙың мәҙәниәтендә сағылыш алған үҙенсәлектәр бер ҙә үҙгәреш кисермәй. Йәғни, һәр мәҙәниәт - ул ҡайһы ғына дәүерҙә йәшәүенә ҡарамаҫтан - үҙен ижад иткән милләттең аң кимәлен, донъяға ҡарашын, эшмәкәрлеген, тормошона мәғәнә биреүсе ышаныуҙарын, рухи ҡиммәттәрҙе сағылдыра. Ошо йәһәттән үҙ асылыбыҙға тоғро булыуыбыҙ беҙҙең сәнғәтебеҙҙе, ә сәнғәтебеҙ беҙҙе һаҡлай, күрәһең.**

**"Урал моңо - 2016" Халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивалендә беренсе урынға - Адилет Азимов (Ҡырғыҙстан), "Йәмле" ансамбле (Татарстан), "Йатаған" этно төркөмө (Башҡортостан); икенсе урынға - Мөслимә Алиева (Үзбәкстан), Илнур Хәйруллин (Башҡортостан), "Беш-Тау" вокаль ансамбле (Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһы); өсөнсө урынға Ооржак Ай-Хаан (Тыва Республикаһы), "Сулускан" вокаль төркөмө (Красноярск крайының Таймыр Долган-Ненец районы), "Тархан" этно төркөмө (Башҡортостан) лайыҡ булды. Абай Әмирханов исемендәге махсус приз Ниджат Рагимовҡа (Әзербайжан) тапшырылды.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

✓ Ә Ишембай ағинәйҙәренең береһе кейгән юрматы ырыуы ханбикәһе кейеме айырым иғтибарға лайыҡ булды. 16-17-се быуаттағы был кейем өлгөһө дәүләт музейҙарында юҡ, уны Ишембайҙағы шәхси музейҙа ғына тап итергә мөмкин.



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**"Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә үткән күркәм саралар араһында "Башҡорт милли кейеме көнө" тип исемләнгән байрам айырыуса күңелгә ятты. Йылдар буйы һандығында ҡәҙерләп һаҡлаған милли кейемдәрен, үҙ ҡулдары менән тегеп, биҙәп алған селтәр, ҡашмауҙарын кейеп, баш ҡала урамдарына сыҡҡан милләттәштәр М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры алдынан Салауат Юлаев майҙанына тиклем атлап уҙҙы. Был марш-парад "Башҡортса кейен!" тигән флэшмоб, концерт менән дауам итте. Сағыу байрамда баш ҡаланан һәм республиканың төрлө төбәктәренән килгән меңдән ашыу кеше ҡатнашты.**

ТУҠТА, МӘЛ!



# МИЛЛИ КЕЙЕМЕБЕҘ...

## рухиәтебеҙ сағылышы

Милли кейем - һәр милләттең рухын, күңел байлығын, тарихын, боронғо көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәйеш ҡағиҙәләрен һынландырған паспорты ул. Башҡорт милләтенең йөҙө, асылы ла уның милли костюмдарының төрлөлөгөндә асыҡ сағыла. Тик һуңғы йылдарҙа был үҙенсәлекле рухи мираҫыбыҙ сәхнә кейеменә тиклем ябайлашып, үҙенең асылын юғалтып бара ине. Ниһайәт, БР Мәҙәниәт министрлығы тарафынан, шулай уҡ йәмәғәтселек кимәлендә лә, милли кейемдәрҙе тергеҙеү, популярлаштырыу буйынса саралар күрелә башланы. "Башҡорт милли кейеме көнө" нәҡ шундай рухты талпындырыусы сараларҙың береһе булып хәтерҙә ҡаласаҡ та инде. Өфө халҡы, артистар, студенттар һәм мәктәп уҡыусылары ғына түгел, Әбйәлил, Баймаҡ, Ишембай, Белорет, Күгәрсен, Учалы, Йылайыр, Федоровка, Бишбүләк, Архангел, Ауырғазы, Балаҡатай, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Илеш, Дәүләкән райондары һәм Туймазы, Сибай ҡалаһы ағинәйҙәре лә милли кейемебеҙҙең бөтә зауығын күрһәтте был көндө. Башҡортостандың төрлө ауылдарынан килгән ағинәйҙәргә Өфөбөҙ урамынан туған телдә яңғыраған моң-көй аҫтында бейеп, милли кейемдә атлап үтеү ҡыҙыҡ тойолһа, ҡала халҡы иһә уларға һоҡланып та, аптырап та баҡты. Сөнки марш-парад рәтендә китеп барыусы ағинәйҙәр кейгән кейемдә илаһи матурлыҡты ла, һәр ырыуға хас үҙенсәлектәрҙе, деталдәрҙе лә күрергә була ине. Ә Ишембай ағинәйҙәренең береһе кейгән юрматы ырыуы ханбикәһе кейеме айырым иғтибарға лайыҡ булды. 16-17-се быуаттағы был кейем өлгөһө, әлбиттә, дәүләт музейҙарында юҡ, уны Ишембайҙағы шәхси музейҙа ғына тап итергә мөмкин. Владимир Бессаренко атлы ирүҙаман ата-бабаларынан ҡалған башҡорт милли кейемдәре коллекцияһын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай, айырым осраҡтарҙа ғына бына ошондай сараларға алып сыға.

Байрамға йыйылған баш ҡала башҡорттары ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәре лә беҙҙең башҡорт милли кейеменең төрлөлөгөн, иҫ киткес бай булыуын баһаланы. "Оҡшаны, күңелдәр тулышып, күҙҙәргә йәштәр төйөлдө. Халҡымдың мәҙәниәте, тарихы менән ғорурланыу хисе күкрәгемә һыймай. Йәш ғаиләләр балалары менән милли кейемдең бер элементын булһа ла кейеп килгән - тимәк, уларҙа рух йәшәй", - тигән яуап алдыҡ күптәрҙән. Баш ҡаланың иғтибарын Парижды алған кеүек яуланыҡ, тиһәк тә, һис ҡупайтып ебәреү булмаҫ. Сөнки унда "Любизар" хәрби-патриотик клубы ағзалары 19-сы быуат башҡорт ирҙәре образында парад юлын һыбай үтте. Салауат Юлаев һәйкәле урынлашҡан майҙанға килеп еткәс, Сәғиҙулла Байегеттең йыры аҫтында бөтә ғәм бергәләп башҡортса бейеү башҡарҙы. Милли кейемдәрҙәге меңдән ашыу кеше, бер төрлө хәрәкәттәр яһап, дәртле көйгә тыпырлатып, осоп-ҡунып бейене. "Башҡортса кейен!" флэшмобынан һуң "Традицион башҡорт кейеме", "Башҡорт сәхнә костюмы", "Заманса кейемдә башҡорт элементтары", "Ике нөктә" балалар кейеме дефилеһы ойошторолдо. Тамашаны алып барыусылар сәхнәлә күрһәтелгән һәр кейем өлгөһөнөң үҙенсәлеге тураһында мәғлүмәт еткерҙе. Бигерәк тә йәштәр өсөн был күргәҙмә фәһемле, кәрәкле ине. Улар башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәгендә балитәктәр нисә ҡат булыуынан алып, камзул, кәзәкиҙәрҙең тегелеше, ир-аттарҙың кейемдәре тураһында арыу уҡ мәғлүмәт алды. Артабан "Мин башҡорт кейемендә!" конкурсына йомғаҡ яһалды. Башҡортса кейенеп фотоға төшөп, шуны интернет селтәрендә урынлаштырыусылар араһында Гөлнирә Аҡбулатова, Эльвина Хисаметдинова һәм Тәнзилә Байсурина еңеүсе тип табылды. Шулай уҡ конкурста ҡатнашҡан ете йәшкә тиклемге кескәй балаларҙың барыһына ла еңеүсе дипломдары тапшырылды. Ғөмүмән, байрам тамашаһы бик мауыҡтырғыс итеп ҡоролдо: сәхнә театр артистары, эстрада йондоҙҙарының сығыштары, моңло йыр, дәртле бейеүҙәрҙән шау-гөр килеп торҙо.

Башҡорттарҙа тирмә ҡормайынса үткән байрам булғаны ла юҡ. Салауат Юлаев майҙанында теҙелешеп киткән тирмәләр тамашасыларға боронғо башҡорт йәйләүҙәренә экскурсия яһарға саҡырҙы. Ҡала халҡына тирмә тормошо былтыр төҙөлгән "Ватан" этнопаркындағы күргәҙмәнән билдәле, шулай ҙа ҡыҙыҡһыныусылар күп булды. Башҡорт милли аш-һыуҙары һатылған тирмәләрҙән халыҡ өҙөлмәне. Бынан тыш, Балаҡатай, Федоровка, Мәсетле, Әбйәлил, Белорет, Ғафури районы һәм Сибай, Ағиҙел ҡалалары оҫталары һәм ағинәйҙәре үҙҙәренең ҡул эштәрен һатыуға алып килгәйне. Балаҡатай районы Билән ауылынан "Тамбур" биҙәү-ғәмәли сәнғәт халыҡ студияһы етәксеһе Венера Ғәлиәкбәрова балитәктәре ҡайып сигелгән күлдәктәр, аҡландағы иң матур сәскәләр төшкән алъяпҡыстар, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн сумкалар, ҡулъяулыҡтар алып килгәйне. "Кешелә милли рух ваҡыт уҙыу менән уяна, милли үҙаң да олоғая бара барлыҡҡа килә. Йәш саҡта мөһим тойолмаған әйберҙәрҙе ҡартая килә баһалай башлайһың. Бөгөнгө байрам ошонда йыйылған тамашасыларҙың һәр береһенең күңеленә үтеп инерлек итеп ойошторолдо. Бындағы йәштәр барыһы ла тамырҙары, халҡының тарихы, көнкүреше, йолалары менән ҡыҙыҡһына башлар, иманым камил", - тип һөйләне Венера Мәзит ҡыҙы.





**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Халыҡтары ассамблеяһы, БР Халыҡтар дуҫлығы йорто, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы тарафынан ойошторолған "Башҡорт милли кейеме көнө" башҡа милләттәр алдында башҡорттарҙың боронғо халыҡ икәнен күрһәтеүҙән бигерәк, йәш быуынды ата-бабаларҙың рухи һәм матди мираҫына иғтибарлыраҡ булырға өндәгән сара итеп ҡабул ителде. Сөнки бында ҡатнашҡан сәнғәт вәкилдәре ике сәғәткә һуҙылған тамаша өсөн алыҫ араларҙы яҡынайтып килеп еткән ағинәйҙәрҙе ни бары башҡорт йәштәре үҙ халҡының милли кейеме ниндәй булыуын күрһен, белһен, тигән маҡсатты күҙ уңында тотто. Киләсәктә был байрам республикабыҙҙың даими үткәрелгән сараларының береһенә әүерелер, тип өмөт ителә. Һәр хәлдә, 2020 йылда Башҡортостанда үткәреләсәк Халыҡ-ара фольклориада фестивален беҙ ошондай халыҡсан байрамдар менән ҡаршыларға тейешбеҙҙер.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**





*"Башҡорт милли кейеме көнө" байрамынан.*

✓ "Ә ниңә машинала елдертеп кенә ҡайтып, бурандан һуң ишек алдын таҙартып китмәй һуң ейәнегеҙ?" тип әйтеп булмай бит инде. Балалары менән ғорурланып ултырһалар ҙа, күңелдәре китек икәнен күрергә була ине.



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЛӘМӘТЛЕККӘ... сертификат

■ Холестерин кимәлен түбәнәйтеүгә тәғәйенләнгән майһыҙ диеталар кире эҙемтәләргә алып килеүе ихтимал, ти иҫкәртә ғалимдар. Бындай рационда кеше йыш ҡына ҡапҡылап алырға ғәҙәтләнә, етмәһә, углеводҡа бай ризыҡтарға өҫтөнлөк бирә, был иһә һимереүгә килтерә. Эксперттар ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары һәм майлы, әммә файҙалы ризыҡтар, мәҫәләң, авокадоға ла иғтибар итергә ҡуша. Майлы һөт аҙыҡтары йөрәкте һаҡлай.

■ Бала илаһа ла, ҮҘ аллы йоҡлап китһә, яҡшыраҡ, тиҙәр. Әммә белгестәр быны бала өсөн зарарлы тип иҫәпләй ине. Һуңғы тикшеренеүҙәр был хәбәрҙе кире ҡаға. Беренсе - Фербар ысулында ата-әсә оҙаҡ ваҡыт бала янына бармай, уның илап туктағанын көтә. Икенсе ысулда баланың үҙенең йоҡоһо килгәнсе йөрөтөргә кәрәк. Ике ысул да балаларҙың йоҡлап китеүен тиҙләткән. Етмәһә, беренсе ысулда балалар төндә һирәк уянған. Илағас, организмда стресс гормоны күтәрелә, тигән фекер ҙә хата булып сыҡҡан, ғалимдар бындай бер тайпылыш та тапмаған.

■ Дәүләт Думаһында "Рәсәй ир-егеттәренең репродуктив сәләмәтлеге" темаһы буйынса үткән кәңәшмәлә ғаилә ҡорғанға тиклем йәштәр сәләмәтлектәрен күрһәтеүсе сертификат алырға тейеш, тигән тәҡдим индерелә. Йәғни, туйға тиклем үк уларҙың бала таба алыу-алмау мөмкинлектәре баһаланасаҡ. Шулай уҡ пациенттар үҙҙәренең сәләмәтлеген хәстәрләргә вәғәҙә биреп, ҡул да ҡуясаҡ. Рәсәйҙә, башҡа илдәр менән сағыштырғанда, хеҙмәткә яраҡлы йәштәге ир-егет күберәк үлә, был иһә балалар тыуыуҙы ла кәметә. Шуға ла был сара халыҡ һанының артыуына ыңғай йоғонто яһар, тип көтөлә.

■ Мичиган университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, балалар телевизор ҡарағанда йәки видео уйындар уйнағанда ата-әсәләрен бөтөнләй ишетмәй. Заманса ҡоролмалар ата-әсәләргә үсмерҙәр менән генә түгел, мәктәпкәсә йәштәге балалары менән дә уртаҡ тел табырға ҡамасаулай. Тикшереү барышында ғалимдар 44 ғаиләнең көн дауамындағы һөйләшеүҙәрен тыңлаған. Асыҡланыуынса, юғары белеме булған әсәйҙәрҙең балалары телевизорҙы һирәгерәк ҡараған, гаджеттар менән һирәгерәк ҡулланған. Бындай ғаиләләрҙә балалар мәғлүмәти тапшырыуҙарға өҫтөнлөк биргән.

■ Артыҡ тән массаһы кешенең сәләмәтлегенә ҙур зыян килтерә. Тән ауырлығы норманан кәм булһа ла насар. Йель университеты ғалимдары раҫлауынса, ныҡ ябыҡ кешеләр йышыраҡ миокард инфаркты кисерә. Һынауҙарҙа инфаркт менән дауаханаға эләккән 60 мең кеше ҡатнаша, уларҙың барыһының да тән ауырлығы норма кимәлендә йә унан түбәнерәк булыуы асыҡлана.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2000-2015 йылдарҙа ғүмер оҙайлығы 5 йылға артҡан. Аҙаҡҡы тапҡыр ғүмер оҙайлығы артыуы 1960 йылда күҙәтелгән булған. Иң ҙур үҙгәрештәр Африкала, унда кешеләр 9,4 йылға күберәк йәшәй башлаған һәм хәҙер уртаса ғүмер оҙайлығы 60 йәшкә еткән. Был сабыйҙар араһында үлем кимәленең кәмеүе, малярияны контролгә алыу менән бәйле. Японияла ҡатын-ҡыҙҙар оҙағыраҡ йәшәй (86,8 йәш). Ир-егеттәр араһында (81,3 йәш) был күрһәткес Швейцарияла иң юғарыһы. 2015 йылда тыуған балаларҙың ғүмер оҙайлығы яҡынса 71,4 йәш буласаҡ, тип фаразлана. Әммә был баланың ҡайһы илдә тыуыуына ла бәйле.

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# БАЛА КҮҢЕЛЕ ДАЛАЛА ШУЛ...

**"Тиҙҙән изге Рамаҙан айы башлана. Йыл һайын түҙемһеҙлек менән көтөп алам уны. Ураҙа тоторға алдан уҡ әҙерләнә башлайым. Кипкән емеш-еләк, хәләл ит күпләп алып ҡуям. Әле бына ауылға өләсәйемә май майы, ҡорот-эремсек алырға ҡайтып барам", - тине танышым.**
**Йөҙө, ысынлап та, ҡыуанyслы ваҡиға көткән кешенеке һымаҡ, яҡтырып, балҡып тора. Йәш кенә булһа ла, Ислам дине ҡанундарын ихлас үтәгән был ҡатынға, әлбиттә, һоҡланмай мөмкин түгел.**

-Өләсәй үҙе ураҙа тота алмағанға күрә, минең өсөн бигерәк ҡыуана. Былтыр ауыҙ асырға, сәхәр эсергә үҙенә өрөк-хөрмә алырһың, тип, пенсияһынан 5 мең бирҙе, күршеһенән май, ҡорот та алып ҡуйғайны. Быйыл да әҙерләйем ти ине, шуға ҡабаланып ҡайтып барыуым. Ошо уҡ автобус менән кире әйләнергә ине.

-Ҡайтҡас, өләсәйең янында бер көн булһа ла ҡалып, эшен эшләп, күңелен күреп киткең килмәйме ни? - тим.

-Яңғыҙ кешенең эше ни ҙә, ашы ни, тигәндәй, эше юҡ ул уның. Аҙнаһына бер тапҡыр иҙәнен һепереп сығарып, сискән кейемен йыуа ла - шуның менән эше лә бөтә, - тине лә, ҡатын автобус тукталышына ашыҡты. Конверт һымаҡ ҡына кескәй сумкаһын усына йомарлап тотоуынан ҡыҙҙың өләсәһенә ҡүстәнәс тә алмауын аңларға була ине...

Ҡыҙҙың өләсәһен күреп беләм. Һикһәнгә баҫҡансы, ҡалалағы балаларына һөт-ҡаймаҡ булһын, тип, һыйырын да, ваҡ малын да тотто. Йығылып, тубығын ауырттырғансы, балалары күпме өгөтләһә лә, һарайын һыуытманы. "Әре мал булмаһа, һарай һалҡын була, ул ваҡытта тауыҡты ла бөтөрөргә тура килә", - тип, һуңғы сиккәсә ҡыртлаштты. Аяғына баҫа алмай башлағас, балалары мал-тыуарын һуйып, бүлешеп алып киткәс иһә ҡураһы, ихатаһы, йорто ғына түгел, үҙе лә етемләнеп ҡалыуын шул йылды уҡ тойҙо ул: өләсәйҙең ите-майы булмағас, ейән-ейәнсәрҙәре лә һирәк ҡайта башланы. Быға тиклем шау-гөр килеп торған ихата тынып ҡалды.

Бынан бер нисә йыл элек Бөйөк Еңеү алдынан тыл хеҙмәтсәндәре турағында яҙырға барғанда танышҡайным ул инәй менән. Атайәсәй ҡарауынан мәхрүм булған кескәйҙәрҙең ҡарашы нисек булһа, балаларының иғтибарына зар-интизар булған оло кешенеке лә шулай икән. Өйгә килеп ингән һәрәте мине үҙенең балаларының береһе тип уйланы шикелле, пенсия килгәс кенә ҡайтаһығыҙ инде, ай буйы берегеҙ бер ҡайтып әйләнмәне, тип, һукранып ҡаршы алғайны. Ризаһыҙлығы, кисерештәре шул тиклем көслө ине булһа кәрәк, минең редакциянан эш буйынса килеүем турағында әйткәнемде бөтөнләй ишетмәй ҙә, тыңламай ҙа ине. Бер аҙҙан һуң ғына алдында сит кеше икәнлеген аңғарҙы. Һуғыш һәм һуғыштан һуңғы ауыр йылдар турағында тормош сәхифәһе турағында һорашҡанда әңгәмәсем күберәк балалары, ейән-ейәнсәрҙәре турағында һөйләне. Иҙәненә күптән еүеш сепрәк теймәгәне, өҫтөндәге күлдәге унып, ниндәй төҫтә икәнлеге беленмәһә лә, өҫтәлендә сәй эсергә банка төбөндә генә шәкәре ятһа ла, береһенә лә һүҙ тейҙермәне. Өс ҡыҙынан ун ейән-ейәнсәре булыуы, уларының бөтәһе лә юғары белем алыуы, йыл һайын бүлә-бүләсәрҙәре тыуыуын ғорурланып тәфсирләне. Сервант быялаһына ҡыҫтырылған берҙән-бер ғаилә фотоһын алып, һәр береһенең исемен ҡат-ҡат әйтеп, балаларының нимәгә өлгәшкәнен бәйән итте. Балалары тормошо, әлбиттә, маҡтауға лайыҡ ине. Һәр береһе үҙ юлын, ишен, тәғәйенләнешен тапҡан. Тик шуныһы менән барыбер күңел килешеп бөтмәне: ҡар күптән иреп, ер-һыу кипһә лә, яңғыҙ әсәһенең йорт-ихатаһын килеп йыйыштырыусы, түшәк-яҫтығын сығарып, өйөн йыуыусы балаһы табылмаған! Шуға ла ҡарт әсәй балаларын ни тиклем маҡтаһа ла, улар турағында яҡшы итеп яҙырға ҡулым бармағайны.

Алтмыш йыл бергә татыу ғүмер иткән ғаиләне яҙырға барғанда ла шул кисерештәрҙе кисергәйнем. Буран булыуға бер аҙна үтһә лә, урамдан ингән-сыҡҡан кешенең эҙе булмағас, тәүҙә йөрәк жыу итеп ҡалғайны. Шулай ҙа бата-сума ихатаға ингәс, һарай артына берләм юл үтеүе күренде. Өйгә инһәм, юбилярҙар сәй эсеп ултыра. Өҫтәренә ҡат-ҡат кейенгәндәр, аяҡтарында - быйма.

Һөтһөҙ генә сәй шөпөрләтеп ултырыуҙарына хужабикә килененең һыйыры һыуалыуы менән аҡланды. Әсәйҙәренең ҡара сәйҙе яратмағанын беләләрҙер бит инде. Хәҙер бит һөттөң ниндәйе генә юҡ: киптерелгәне, айыртылғаны, ҡуйыртылғаны, хатта бер ай буйы әсемәй торған ҡайнатылғаны ла бар.

Был икәү ҙә - береһе һуғыш ветераны, икенсеһе тыл хеҙмәтсәне - үҙыша-үҙыша балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен маҡтаны. Бер ейәненә яңыраҡ машина алырға аҡса менән ярҙам иткәндәрен һөйләнеләр. "Ә ниңә яңы машинала елдертеп кенә ҡайтып, бурандан һуң ишек алдын таҙартып китмәй һуң ейәнегеҙ?" тип әйтеп булмай бит инде оло кешеләргә. Балалары менән ғорурланып ултырһалар ҙа, күңелдәре китек икәнен күрәҙәсе булмаһаң да күрергә була ине. Күңелһеҙләнмәҫ ерендән күңелһеҙләнерһең - батшалар йәйәү йөрөгән урынға ла һуҡмаҡ юҡ бит. Исмаһам, юбилей көнөндә ҡәҙерле кешеләренең яраткан ризығын бешереп, күстәнәстәр менән ҡайтып, тыуған йорттарын таҙартып, иҙәнен-керен йыуып, атайәсәйҙәренә байрам яһап китергә була бит...

Тиҙҙән, ысынлап та, рамаҙан айы башлана. Аллаһы Тәғәләнең ризалығын алыу, белеп һәм белмәй эшләгән гонаһтарҙы ғәфү иттереү сараларының иң мөһиме - әсәй-атайына, ҡартайған туғанына һөйөнөс һәм ҡыуаныс биреү тип әйтмәксемен үрҙә бәйән ителгән тормош күренештәре аша. Изге айҙа яҡын кешеләребеҙгә, бигерәк тә беҙҙең ярҙамға, йылы мөнәсәбәтебеҙгә мохтаж оло кешеләргә, өләсәйҙәргә, олатайҙарға иғтибар күрһәтергә онотмайыҡ. Йәннәткә инеүҙең иң тура юлы - изгелек эшләү, тиелә хәҙистә. Әйҙәгеҙ, ошо изге айҙа берберебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың ризалығын алыу, уларҙы шатландырыу өсөн күберәк матур ғәмәлдәр ҡылайыҡ, тимәксемен.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# БАРЫҺЫ ЛА ҮҘЕБЕҘҘӘН ТОРА

**Сәләмәтлек - ул беҙҙең тормошобоҙ. Аллаһ беҙгә ғүмеребеҙҙе бүләк итеп биргән. Һәм, әлбиттә, ошо бүләкте изге күңелдән ҡабул итеп, уны һаҡлап ҡына тотонорға кәрәк.**

Иң беренсе, әйҙәгеҙ, сәләмәтлек турағында һүҙ йөрөтәйек. Сәләмәтлегебеҙҙе тик үҙебеҙ генә һаҡлай алабыҙ һәм быны эшләргә бурыслыбыҙ, сөнки Мөхәммәт (с.ғ.с.), кешенең физик сәләмәтлеге лә, рухи сәләмәтлеге лә мөһим, тигән: "Йауап көнөндә һәр кем Аллаһ алдында ерҙәге тормошо хаҡында ҡаты яуап бирәсәк: ниндәй белем алған, ниндәй байлыҡтар менән файҙаланған, ул байлыҡтарҙы нисек тапҡан, нисек тотонған, сәләмәтлеген нисек һаҡлаған һәм тәнен нисек файҙаланған?" Хәҙистән күренеүенсә, был тормош беҙгә аманат итеп бирелгән.

Ислам динен тотҡан мөьмин мосолмандар диндең ҡағиҙәләрен белә. Ул иң беренсе - таҙалыҡ. Һәр динле кеше көнөнә биш тапҡыр, намаҙ алдынан, тәһәрәтләнә. Был - таҙалыҡ. Икенсеһе - намаҙ. Намаҙ ул физик һәм рухи күнегеү. Рухың аша Аллаһ менән осрашһаң, хәрәкәт - сәләмәтлек өсөн. Намаҙ ваҡытында кешенең 36 ағзаһы хәрәкәткә килә. Тимәк, организм тик тороуға дусар булмай. Функциялар һәр саҡ эшләй. Өсөнсө - ураҙа. Ураҙа ваҡытында организмдағы барлыҡ бысраҡтар сығарып ташлана. Ай буйына бөйөрҙәр, бауыр, үпкә, эсәктәр, ашҡаҙан таҙара. Быны бит, диндә булыу ҙа, мәсеткә йөрөү ҙә сәләмәтлек өсөн бик файҙалы.

Аллаһы Сөбхәнәкә Тәғәлә һәр ауырыуҙы өсөн дауаһын да биргән. Уныһын ул сер итеп, үҙегеҙ уҡып белегеҙ, тип йәшергән. Элек-электән халыҡ араһында әүлиәләр, башҡа өшкөрөүселәр ҙә булған. Улар үләндәрҙе нисек файҙаланырға белгәндәр. Үләндәрҙе һәр кем үҙ белдеге менән файҙалана алмай. Шулай ҙа хәҙерге заманда үләндәрҙең шифаһы турағында китаптар күп. Ләкин шуны ла онотorға ярамай: ҡайһы бер үләндәр файҙалы булһа ла, икенсеһе ағзаларға зыян килтереүе ихтимал.

Тағы ла бер мәл. Хәләл һәм харам. Был кеше сәләмәтлеге өсөн Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән тыйыу һәм рөхсәт. Әйтәйек, суска ите, ҡан, емтек, мал талағы, хәмер - былар барыһы ла харам. Сөнки улар сәләмәтлек өсөн бик зыянлы. Уны һәр кем белә, әммә ни өсөндөр сәләмәтлеген ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, ҡулланыуын дауам итә. Әгәр Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмеребеҙҙә һаусәләмәт, шатлыҡ-ҡыуаныста, күпме бирелгән - шунса йәшәйбеҙ, тиһәк, уның ҡушҡандарын да тайпылышһыҙ үтәү фарыҙ.

**Азат ХӘЛИЛОВ,**
**имам-хатип.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ЙӘННӘТ ҠАПҠАЛАРЫН АСҠАН,

## Йәһәннәм ҡапҡаларын япҡан ай



**Башҡа айҙарҙан йөҙҙәрсә, меңдәрсә тапҡырға юғарыраҡ күтәрелгән сираттағы Рамаҙан айына аяҡ баҫырға торабыҙ. 5 июнь ҡояш байыу менән тәрәүихтәргә, сәхәрҙәргә, ифтарҙарға һәм ураҙаға башланғыс биреләсәк. Рамаҙанда Йәннәт ҡапҡалары асыла, Йәһәннәм ҡапҡалары ябыла, мосолмандарҙы тура юлдан тайпылдырмаһын өсөн шайтандар сылбырҙар менән бәйләнә. Хәҙистәрҙә: "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һыҙылыуын теләр ине", - тип әйтелә.**

Быйыл ураҙа көндәң иң оҙон осорона тап килә. Аллаһы Тәғәлә ҡолдарын ай дауамында итәғәтлектә һынаясаҡ. Ысынлап та, көнөнә 19-20 сәғәт буйына һыуһыҙ, ауыҙға бер тәғәм ризыҡ ҡапмайынса йөрөүе еңелдән түгел. Еңелдән түгел, шулай ҙа... Ауырлыҡтар артында - Аллаһы Тәғәләнең ризалығы. Раббыбыҙ Изге китабында, ҡыйынлыҡтар артында икеләтә еңеллек, шатлыҡ ята, тигән хәҡиҡәте менән үҙенең талаптарын үтәгәндәргә көс, ҡеүәт бирә. Ҡояш байып, ифтар ваҡыты ингәс тә, бер йотом һыу, бер хөрмә менән Раббыбыҙ көндөҙ күргән бар асығыу һәм һыуһау мәшәҡәттәребеҙҙе оноттора, яңы көс, дәрт менән бүләкләй. Был мәлдә беҙ ғүмеребеҙҙең аҡшамы тураһында ла уйланабыҙ. Бер йотом һыу менән бар ураҙа ҡыйынлыҡтары онотолған кеүек, үлем менән бергә был донъяның бар проблемалары, етешһеҙлектәре, байлыҡтары, дан йә фәҡирлек, сирҙәр, бөтә михнәттәр онотоласаҡ. Алдыбыҙҙа бер генә мәсьәлә - үткәргән ғүмеребеҙ өсөн яуап тотоу фәмәле генә тороп ҡаласаҡ. Ул ваҡытта: "Йә, Раббым, ҡайтар беҙҙе!" - тип ялбарасаҡ берәүҙәр. Тороп ҡалған хәләл ефеттәре һәм балалары, алынмаған автомобилдәре, биләмәгән вазифалары хаҡына тағы ғүмер һораясаҡмы улар? Юҡ, улар ғәфләттә үткәрелгән ғүмерен, уҡылмаған намаҙҙарын, тотолмаған ураҙаларын, түләнмәгән зәкәттәрен, ҡылынмаған хажын үтәр, ә иң ҡурҡынысы, әйтелмәгән шәһәҙәтен әйтер өсөн оҙайтырға теләйәсәк ғүмерҙәрен. Әммә инде һуң буласаҡ...

Иблис тә беҙгә ғүмеребеҙҙе оҙон итеп күрһәтергә тырыша. Хәйләләре менән изге ғәмәлдәрҙән йыраҡлашыу өсөн вәсвәсәләр күндерә, намаҙ уҡырға әле ваҡыт бар, изге ғәмәлдәргә ғүмереңдең аҙағын ҡалдыр, ә әле күңел асып ҡал, тип, зиһенебеҙҙе аулай, йөрәгебеҙгә зыян килтерә. Әммә ул Аллаһы Тәғәләнең ихлас ҡолдарына ҡаршы бер ни эшләй алмаясаҡ. Етмәһә, яңы рухи үрҙәр яулаһын өсөн, иблис һәм нәфес ҡотҡоһона бирелмәһен өсөн Аллаһы Тәғәлә кешегә яңынан-яңы мөмкинлектәр биреп кенә тора. Рамаҙан айы, намаҙҙар, ураҙа, Ҡөрьән уҡыу һәм ятлауҙар, Ҡәҙер кисе, тәрәүих, фитр саҙаҡалар - ана шул мөмкинлектәрҙән.

Рамаҙан айындағы ураҙа - Ислам диненең биш шарты, тәрәге араһында Аллаһы Тәғәләгә шәһәҙәттән һәм намаҙҙан ҡала өсөнсө фарыз ғәмәл. Ураҙаның тышҡы асылы - көн дауамында, сәхәрҙән (ҡояш ҡалҡҡансы ике сәғәт тирәһе) ҡояш батҡансы һыу-ризыҡтан, енси мөнәсәбәттәрҙән тыйылыу булһа, рухи асылы - ай дауамында барлыҡ гонаһлы ҡылыҡтарҙан: әрләшеүҙән, ғәйбәт һөйләүҙән, ялғандан һәм үҙ ҡәлебеңә йәки башҡаларға зыян килтерә торған башҡа эштәрҙән йыраҡлашып, бар булмышыбыҙ менән Раббыбыҙға һыйыныуҙан ғибәрәт. Был изге айҙа ураҙа тотоу - балиғ булған һәр мосолманға мотлаҡ. Мосафирҙарға, ауырыуҙарға йә ҡартайыуҙан хәлһеҙләнгәндәргә, ауырлы, сабый имеҙгән йәки физиология менән бәйле таҙарыныу мәлендәге ҡатын-ҡыҙҙарға изге ғәмәлде кисектереп торорға рөхсәт ителә. Ләкин үрҙә әйтелгән сәбәптәр арҡаһында ураҙаны кисектереүселәр (сәләмәтлектәре ҡаҡшаған ололарҙан тыш) мөмкинлектәре булыу менән ҡалған ҡаза көндәрҙе тултырып ҡуйырға тейеш. Сәләмәтлектәре ҡаҡшау сәбәпле ураҙа тота алмағандар фидйә түләй.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһис-сәләм бер хәҙисендә: "Аллаһы Тәғәләгә иман килтереп һәм уның әжеренә өмөт итеп Рамаҙан айында ураҙа тотоусыға уның бар булған әүәлге гонаһтары ғәфү ителәсәк", - тип әйтә. Дин ғалимдары, "иман килтереп" тигән һүҙҙәр аҫтында, ураҙа тотоусы имандың бөтә терәктәренә - Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә, фәрештәләргә, изге китаптарға, бәйғәмбәрҙәргә, Ҡиәмәт көнөнә һәм тәҡдиргә шик-шөбһәһеҙ инаныра, фарызды - фарыз тип танырға, хәләлде - хәләл, харамды - харам тип айырырға тейеш, тигәнде аңлай. Тимәк, үрҙә телгә алынған шарттар үтәлгәндә, кеше Аллаһы Тәғәлә рәхмәтенә өлгәшеү менән бергә үҙенең гонаһтары юйылыуына ла өмөт итә ала. Ләкин һәр ғәмәлдең нигеҙе ниәт икәнен дә оноторға ярамай. Ураҙаның сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуы, социаль йөкһөтһө һәм башҡа ыңғай яҡтары булыуы сәбәпле, һаулығымды яҡшыртам, артыҡ ауырлыҡты ташлайым кеүегерәк ниәттәр менән был оло ғәмәлде башҡарыу уның бар ҡиммәтен юҡҡа сығара. Был фарызды Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, Уның ҡушҡандарына итәғәт итеп үтәү зарур.

**Ошо изге айҙа Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеп, Уның ризалығын алып, гонаһ-кәмселектәрҙән таҙарынырға насип итһен.**

**Арыҫлан ИСКӘНЙӘРОВ**
**әҙерләне.**

### Сәхәр доғаһы

**Нәүәйтү ән әсумә саумә шәһри Рамаҙана минәл-фәжри иләл-мәғриб. Хәлисаллил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр!** (Мәғәнәһе: "Аллаһ хаҡы өсөн тип, иртә таңдан ҡояш батҡансы ихлас күңел менән Рамаҙан айы ураҙаһын тоторға ниәтләнем").

### Ифтар доғаһы

**Аллаһүммә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризҡикә әфтартү үә лисауми ғадин мин шәһри рамаҙанә нәүәйтү фәғ-фирли йә ғаффәрү мә ҡаддәмтү үә мә әххарту.** (Мәғәнәһе: "Эй, Аллаһ! Ошо ураҙаны мин Һинең өсөн генә тоттом, Һиңә генә иман килтерҙем, тик Үҙеңә генә тәүәккәлләп, Һин биргән ризыҡ менән ауыҙ астым. Эй, гонаһтарҙы ғәфү итеүсе Аллаһ! Минең элек эшләгән гонаһтарымды ла, алда эшләү ихтималы булғандарын да ярлыҡай күр").

### Ураҙаны боҙған ҡайһы бер сәбәптәр:

1. Белә тороп ашау, эсеү ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 187-се аят).
2. Үҙ теләге менән юрамал ҡоҫоу.
3. Күрем һәм нифәс осоронда (бала тапҡандан һуң)."Бындай ваҡытта ураҙа тотмай, һуңынан ҡаза ҡыла инек, ләкин намаҙҙы ҡаза ҡылманыҡ",-тине анабыҙ Ғәйшә.
4. Ашҡаҙанына йә ҡан тамырына туҡлыҡлы матдәләр индереү.
5. Белә тороп енси мөнәсәбәткә инеү.

Ошо сәбәптәр менән ураҙаһы боҙолған кешеләр кәффәрәт ураҙаһын тоторға тейеш, йәғни бер туктауһыҙ ике ай буйы ураҙа тоторға бурыслы. Ураҙа тотмаһа, 60 кешене ашата.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Алтынсы сер: мөхәббәттең ыңғай көсө

Мөхәббәт - уны ҡулланып, башҡаларға уңышлы булырға ярҙам итеү сараһы ул. Ул тирә-яҡтағыларға үҙҙәрен кәрәкле, әһәмиәтле, лайыҡлы һәм камиллашыуға һәләтле итеп тойоу мөмкинлеге биреү. Кешеләрҙе һанға һуғып, уларҙың ыңғай сифаттарын асып, беҙ үҙебеҙгә ярҙам итәбеҙ. Башҡаларға бирә алған иң ҡиммәтле бүләктәрҙең береһе - улар үҙҙәре быға тиклем уйлап та ҡарамаған ҙур ҡеүәтте, бөйөклөктә таныу һәм күреү.Башҡаларға ярҙам - бер яҡлы ғына процесс түгел. Башҡаларҙы дәртләндереп, уларҙың баһаһын күтәреп, беҙ яратыуға ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереп кенә ҡалмайбыҙ, үҙебеҙгә ышанысыбыҙҙы ла арттырабыҙ. Был хаҡта Эммет Фокс бик матур итеп әйткән: "Тәрән аңланған яратыу бөтөн нәмәне еңеп сыға. Ул еңә алмаған ауырлыҡ, ул дауаламаған ауырыу, ул асмаған ишек, ул ғәфү итмәгән ғәйеп, ул емермәгән диуар, ул юймаған гонаһ юҡ. Мөхәббәт һеҙҙе яңы юғары үлсәмгә күсерә". Мин эшләгән эшемде яратам, мин кешегә аңбелем таратырға яратам. Мин һеҙҙең өсөн яҙған ошо китабымды яратам!

## Етенсе сер: аҡыл - шәхси эш

Бөгөнгө кешенең аҡылы һәм уның мөһим ҡоралы - мейе тураһында бик аҙ билдәле. Беҙ даими рәүештә шундай һығымтаға киләбеҙ: ни тиклем күберәк белгән һайын, шул тиклем күберәк белергә кәрәк.

Аҡылыбыҙ электр кеүек үк, үҙ мәнфәғәттәребеҙҙә файҙаланылған һәм мәңгелек йәшәйәсәк көс. Ул көс фараз тыуҙыра. Фән көндән-көн уның иҫ киткес ҡеүәте тураһында яңынан-яңы нәмәләр белгән һайын беҙгә тыуғандан уҡ бирелгән бүләкте максималь рәүештә ҡулланырға тейешбеҙ.

Ситтә нимәләр эшләгән һайын, эшләнеүҙәр маҡсатынан алыҫлаша барабыҙ. Үҙегеҙ хыяллаған тормош һәм барлыҡ проблемаларҙы хәл итеү өсөн көстә һәм ышанысты бары тик эстә эҙләргә кәрәк.

Ниндәйҙер көс һеҙҙе был донъяға тормошто бөтөн тәрәнлегендә аңлау өсөн китап уҡыһын, семинарҙа булһын йәки ғилми асыш көтөп ултырһын тип килтермәгән. Баштан уҡ барлыҡ яуаптарығыҙ һеҙҙең үҙегеҙгә һалынған. Һеҙ тормошто тулыһынса һәм камил аңлаһын өсөн аҡыл, интуиция һәм интеллект ресурстары бирелгән. Кешеләр бөтән ерҙән үҙҙәренә ышаныс, рухи үҫеш, матди именлек эҙләй, доға ҡыла, күрәшә, шуға ынтыла. Әммә бер ваҡытта ла үҙүҙенә үҙҙәренән башҡа берәү ҙә ярҙам итә алмаясаҡ икәненә отчет бирмәй. Ғаилә лә, дуҫтар ҙа, етәкселәр ҙә, хөкүмәт тә, хатта дин дә ярҙам итмәй. Бының сәбәбе ябай ғына һәм ул күпселектең иғтибарынан ситтә ҡала. Күпселек һаман да һайлау хоҡуғына эйә булыуҙары һәм теләгәндәренә бөйөк көс ярҙамында өлгәшә алыуы хаҡында уйлап та ҡарамай. Мәғариф, хөкүмәт, дин, берләшеп, кешене бәйлелектә тотоу мөхитен барлыҡҡа килтерә. Һөҙөмтәлә күптәр ярҙамды ситтән эҙләй. Улар тирә-яҡтағыларҙан, бигерәк тә Аллаһы Тәғәләнән үҙҙәре эшләй торған нәмәләрҙе эшләүҙе үтенә, ялбара. Улар хатта үҙҙәренә аҡыл, интуиция, мөхәббәт, камиллыҡ һәм һәләт кеүек бөйөк көс бирелеүен һәм уларҙың ирекҡә ынтылыуын ғына аңларға теләмәй.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



**6 ИЮНЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 9-я и 10-я серии. Детективный сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.

**РОССИЯ 1**

Уважаемые читатели!
Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 11-13-я серии. Драматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 Торжественная церемония открытия XXVII кинофестиваля "Кинотавр".
02.00 Гран-При кинофестиваля "Кинотавр", Премии "Ника", Премии "Золотой орел" и Премии Московского кинофестиваля. "Мой сводный брат Франкенштейн". Драма (12+).
04.35 "Комната смеха".

**БСТ**

**Уважаемые читатели!**
**Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**17.45 "Интервью" (12+).**
**18.00 "Автограф" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Следопыт" (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Ведьмы из страны Оз". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Интервью" (12+).**
**02.45 Т.Миннуллин. "Мулла" (12+).**

**7 ИЮНЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.25 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 11-я и 12-я серии (12+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
03.00 Новости.

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 14-16 серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
01.55 "Химия нашего тела. Гормоны", "Приключения тела. Испытание огнем". Док. фильмы (12+).
03.30 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.30 "Комната смеха".

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Без координат" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Созвездие талантов" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.45 "Малый бизнес" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.45 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Один день". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Р.Нурлыгаянов. "Озеро моей души" (12+).**

**8 ИЮНЯ**
**СРЕДА,**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.25 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
1950 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 13-14-я серии. Сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 17-я и 18-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.55 "Мы родом из мультиков", "Аида Ведищева. Где-то на белом свете..." Док. фильмы (12+).
03.00 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.00 "Комната смеха".

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Защитница" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Созвездие талантов" (6+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**18.00 "Башкорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Компания волков". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Н.Гаитбай. "Сердце не стареет" (12+).**

**9 ИЮНЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 15-я и 16-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
04.05 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 19-я и 20-я, заключительная, серии. Драматический сериал (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.55 "Людмила Зыкина. Бриллианты одиночества", "Человеческий фактор. Бензин", "Человеческий фактор. Волшебное стекло". Док. фильмы (12+).
03.05 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.05 "Комната смеха" (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Преград.net" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Защитница" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Созвездие талантов" (6+).**
**15.15 "Сәмәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**18.00, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Катись!" Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Интервью" (12+).**
**01.45 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**

**10 ИЮНЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.30 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Легенды Ретро FM". Концерт.
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Городские пижоны". "Роналду" (12+).
02.20 "Бумажная погоня". Комедия (12+).

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.10 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Любовь из пробирки". Мелодрама (12+).
22.00 "Вести".
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Матч открытия. Франция - Румыния". Прямая трансляция из Франции.
01.45 "Если бы я тебя любил..." Худ. фильм (16+).
04.00 "Комната смеха".

**БСТ**

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Защитница" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Красная кнопка" (16+).**
**12.45 "Телелавка" (12+).**
**13.00 "Башкорт йыры-2016" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Созвездие талантов" (6+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Правила взлома" (16+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.00 "Башкорт йыры" (12+).**
**20.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Люди скорости" (12+).**
**23.00 "Срочная доставка". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Интервью" (12+).**
**01.45 А.Гаффар. "Мелодии весны" (12+).**

**11 ИЮНЯ**
**СУББОТА,**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.50, 06.10 "Не хлебом единым". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
08.15 "Играй, гармонь любимая!"
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.50 "Аида Ведищева. Играя звезду" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.10 "На 10 лет моложе" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Максим Перепелица". Комедия.
17.05 "Леонид Быков. Будем жить!" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
18.50 "Сборная России. Перезагрузка" (12+).
19.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.50 "Подмосковные вечера" (16+).
23.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. Сборная России - сборная Англии. Прямой эфир из Франции.
02.00 "Форсаж-5". Боевик (16+).
04.25 "Модный приговор".
05.25 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

05.05 "Неисправимый лгун". Худ. фильм (6+).
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Михаил Державин" (12+).
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Золотая клетка". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Золотая клетка". Продолжение сериала (16+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "И в горе, и в радости". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Крепкий брак". Худ. фильм (16+).
02.50 "Охота на принцессу". Худ. фильм (16+).
04.45 "Комната смеха".

**БСТ**

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Битва за планету Терра" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**16.00 "Байык-2016" (12+).**
**17.00 "Созвездие талантов" (6+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (12+).**
**20.45 "Шальные деньги" (16+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башкорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Тайсон". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости недели (на башк. яз.).**
**01.30 Х.Ибрагимов. "Башмачки" (12+).**

**12 ИЮНЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

06.00 Новости.
06.10 "Россия от края до края" (12+).
07.10 "Вертикаль". Худ. фильм.
08.35 "Живите в радости". Комедия.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "ДОстояние РЕспублики". "Роберт Рождественский".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Романовы" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Романовы" (12+).
17.00 "Офицеры". Военная драма (16+).
18.55 Концерт, посвященный 45-летию фильма "Офицеры".
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. Сборная Германии - сборная Украины. Прямой эфир из Франции.
02.00 "Брат-2". 15 лет спустя". Концерт (16+).
03.50 "Лестница". Комедия (16+).

**РОССИЯ 1**

05.40, 03.55 "Стряпуха". Худ. фильм.
07.05 "Калина красная". Худ. фильм (12+).
09.20 "Экипаж". Худ. фильм.
12.10 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Суперфинал.
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации.
15.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Суперфинал. Продолжение.
16.20 "Солнечный удар". Драма (12+).
20.00 "Вести недели".
22.30 "Долгое прощание". Драма (12+).
00.30 День России. Праздничный концерт.
02.20 "Охота на принцессу". Худ. фильм (16+).
05.25 "Комната смеха".

**БСТ**

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.55 "Лев Макс". Мультфильм (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Ирәндек мондары-2016" (12+).**
**15.30 "Историческая среда" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Город детства" (12+).**
**17.15 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**17.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**17.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.00 "История признания" (12+).**
**18.20 "Конго". Худ. фильм (6+).**
**20.30 "Байык-2016" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (0+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 Гала-концерт "Сердце Евразии" (12+).**
**02.45 А.Островский. "Гроза".**

*ЙӘШЕЛ ДАУАХАНА*

**Ышаныуы ҡыйын, әммә бөгөн киң таралған был үҫемлекте оҙаҡ ваҡыттар сүп үләне тип утағандар. Ә француздар XVII быуатта уны кулинария шедеврҙарында ҡулланған. Һүҙ, әлбиттә, ҡуҙғалаҡ тураһында. Уның 200 төрө, "сүп үләненә " хас булғанса, Антарктиданан башҡа бөтөн ерҙә лә үҫә. Әммә ризыҡҡа уның киң таралған бер нисә төрө, шул иҫәптән Ат ҡуҙғалағы һәм Әсе ҡуҙғалаҡ ҡына файҙаланыла. Ҡуҙғалаҡты борщ бешергәндә, бәлеш эслеге итеп тә ҡулланырға мөмкин икәнен күптәр белһә лә, уның дауалау сифаттары тураһында бик аҙҙар ғына хәбәрҙарҙыр, моғайын.**

# ҠУҘҒАЛАҠ

Ҡуҙғалаҡ иртә яҙҙан, температура нулдән юғары күтәрелә башлау менән шытып сыға. Тап шул ваҡытта организмыбыҙға витаминдар етмәй ҙә инде. Шуға ла белгән кешеләр иртә яҙҙан йәшел дарыухананы эҙләй башлай. Тап ошо иртә яҙҙа ул файҙалыраҡ һәм организмды әҙерәк өҙлөктөрә, сөнки йәйгеһен үҫемлектә ҡуҙғалаҡ кислотаһы арта һәм ул бөйөрҙәр менән проблемаға килтереүе мөмкин. Әммә халыҡ уйлап табыуға оҫта һәм ҡуҙғалаҡ кислотаһын аҡбур ярҙамында нейтралләштерә: бының өсөн бер кило ҡуҙғалаҡтағы кислотаны углекислый газға һәм юшҡынға әйләндерер өсөн бер грамм аҡбур етә.

**Ҡуҙғалаҡтың файҙаһы.** Ул - түбән калориялы диетик ризыҡ. Уның аҙыҡ-түлек ҡиммәте аҡһым яғына ауышҡан, майҙар һәм углеводтар күләме бик аҙ. Витаминдар составында А провитамины, С витамины һәм бета-каротин алдынғылыҡты бирмәй. 100 грамм ҡуҙғалаҡ уларҙың көндәлек нормаһын бирә. Шулай уҡ ул В, Е, РР төркөмө витаминдарына бай. Минералдар араһында калий (500мг/100г) һәм магний (400г/100г) алда тора. Унда шулай уҡ кальций, натрий, фосфор, аҙ күләмдә тимер, башҡа минералдар бар. Ҡуҙғалаҡта алма, лимон, ҡуҙғалаҡ, кофе кислоталары бар, һәм уларҙың миҡдары миҙгелгә ҡарап үҙгәрә.

Дөйөм алғанда, ҡуҙғалаҡ беҙгә нимә бирә? Дауаланғанда уның япраҡтары, тамыры ҡулланыла һәм уларҙың әүҙемлек спектры бик киң.

**Үҫемлек үт ҡыуҙырыу һәләтенә эйә һәм аппетитты аса.** Бының өсөн ҡуҙғалаҡ ашҡаҙан көбөн ҡуҙғытып, уның перистальтикаһын яҡшыртыусы һәм бауырҙы үт эшләп сығарыуға көйләүсе хризофан кислотаһына бурыслы. Ошо сифаты арҡаһында үҫемлекте бауыр дисфункциялары, дизентерия ваҡытында, аш эшкәртеү боҙолғанда һәм эс ҡатҡанда тәғәйенләйҙәр. Был маҡсатта үҫемлектең яңы ғына һығылған һутын көнөнә өс тапҡыр бер ҡалаҡ йәки тамыры төнәтмәһен (1 ҡалаҡ ваҡланған сеймалды 250 мл ҡайнар һыу менән бешекләп, 30 минут һыу ваннаһында бешерергә, һыуынғас, һарҡытырға) көнөнә өс тапҡыр 50 мл эсергә.

Актив матдәләр ҡуҙғалаҡты ҡанды туҡтатыусы сифаттар менән байыта, шуға күрә уны геморрой, үпкә һәм аналыҡ ҡан ағыуҙары ваҡытында рационға индереү зарур.

**Тиреләге фурункулдар, сей яралар һәм хатта дерматиттарҙың ҡайһы бер төрҙәре үҫемлектең һуты менән дауалана.** Уларға йомшартып ыуылған япраҡтарҙы һалып, өҫтөнән бәйләргә йәки пластырь йәбештерергә кәрәк.

Фарсы табибы һәм ғалимы Әбүғәлисина **ҡатын-ҡыҙҙарҙың күрем алды һәм нәҫелдән ҡалыу синдромын еңеләйтеү өсөн** ҡуҙғалаҡтың шәп сара булыуын белгән. Ошо ваҡытта неврозды һәм күрем ауыртыныуҙарын кәметеү өсөн уның башланыуынан бер аҙна элек ашарҙан ярты сәғәт алда 80 - 100 мл ҡуҙғалаҡ төнәтмәһе эсергә кәрәк. Ҡанды туҡтатыу сифаты күремдең аҙыраҡ күләмдә килеүен һәм еңел үтеүен тәьмин итә. Климакс ваҡытында төнәтмәне даими, уңайһыҙлыҡ тойолоу менән эсергә тәҡдим ителә. Бының өсөн ҡуҙғалаҡ япраҡтарын алдан әҙерләргә, киптерергә йәки туңдырырға кәрәк.

Танау ҡыуышлығы елһенгәндә үҫемлектең яңы ғына һығылғын һуты ла, тамырҙарының төнәтмәһе лә файҙаланыла. Ринит, гайморит ваҡытында ҡуҙғалаҡтың һөҙөмтәлелегенә ышаныу өсөн уның экстрактының барыбыҙға ла билдәле "Синупрет" препараты составына инеүен белеү ҙә етә.

Ревматизм ваҡытында ҡуҙғалаҡ тамырының спиртлы төнәтмәһен ҡулланалар. Бының өсөн 20 г ваҡланған тамырҙы 10 мл араҡыға һалып, 10 көн йылы ҡараңғы урында тоталар һәм һарҡыталар. Килеп сыҡҡан төнәтмәне ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр 20 тамсыны бер аҙ һыу ҡушып йәки һыуһыҙ ғына эсергә.

Пародонтоз һәм башҡа ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙарын ҡуҙғалаҡтың тамыры төнәтмәһе менән сайҡаталар. Үҙенең антисептик һәм антибактериаль сифаттары һөҙөмтәһендә уның ярҙамы ҙур.

Ҡуҙғалаҡ япраҡтарының актив компоненттары диатез ваҡытында тиренең ҡысытыуын һәм боҙолоуын кәметергә ярҙам итә. Бының өсөн 100 г ҡуҙғалаҡтың ҡуйы төнәтмәһен ваннаға һалып, шул һыуҙа йыуынырға кәрәк. Бер нисә процедуранан һуң еңеллек килер.

Халыҡ медицинаһы ҡуҙғалаҡтың шешкә ҡаршы активлығын да билдәләй. Атап әйткәндә, аналыҡ муйынтығының яман шешен дауалауҙың методикаһы билдәле. Йәғни 12 көн ҡуҙғалаҡ тамыры төнәтмәһе менән шыйыҡсаны һиптерергә кәрәк.

Ҡуҙғалаҡтың зыяны ла бар. Хатта яҙ башында уҡ йыйған ҡуҙғалаҡты оҙаҡ ваҡыт ҡулланһағыҙ, ундағы кислота бөйөрҙәрегеҙгә ауырлыҡ килтереүе мөмкин, сөнки кислота, кальций менән берләшеп, таш булып ултыра. Кислоталар күп булғанлыҡтан, ҡуҙғалаҡты ашҡаҙан һуты юғары һәм ашҡаҙан сей яраһы булғанда ҡулланырға ярамай. Уны шулай уҡ ауырлы ваҡытта ашау тыйыла. Менюға даими рәүештә ҙур күләмдә ҡуҙғалаҡ ҡулланыу организмдан ҡуҙғалаҡ кислотаһының кальцийҙы йыуып сығарыуына килтерә. Шуға күрә, уны дауаланыу сараһы итеп ҡулланғанда тәҡдим ителгән күләмде арттырмағыҙ һәм мотлаҡ рәүештә дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшегеҙ.

*КИҪӘТӘБЕҘ!*

## ЙӘЙГЕ СИРҘӘР

**Һәр миҙгелдең үҙ ауырлыҡтары. Ә бына йәйге осорҙа беҙҙе ниндәй ауырыуҙар һәм ауырлыҡтар һағалай һуң?**

### Йөрәк-ҡан тамыры ауырыуҙары

Йәйге эҫене хатта һау йөрәк тә ауыр кисерә, был ҡан баҫымы күтәрелеүе менән бәйле. Ҡан һыу етешмәгәнлектән ҡуйыра, кислород менән аҙ тәьмин ителә башлай. Был гипоксияға, иҫтән яҙып ҡолауға, инфаркт һәм инсультҡа килтереүе мөмкин.

**Ни эшләргә?** Табиб яҙған дарыуҙарҙы ашап тороғоҙ. Һәр саҡ үҙегеҙ менән нитроглицерин йөрөтөгөҙ. Эҫелә күп эшләмәгеҙ. Баш кейеме кейергә бер ваҡытта ла онотмағыҙ. Майлы аҙыҡ менән туҡланыуҙы кәметегеҙ, организмығыҙҙы һыуға сарсатмағыҙ.

### Гипертиреоз

**Гипертиреоз - ҡалҡан биҙенең гиперфункцияһы боҙолоуы ул.**

Ҡояш радиацияһы, эҫе һауа, артыҡ йод ҡалҡан биҙе шәп эшләй башлауына килтереүе бар. Ҡалҡан биҙенең гормондарҙы күп етештереүе гипертериоз ауырыуы барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итеүе мөмкин. Был ауырыуҙың төп билдәләре: һәр ваҡыт эҫе кеүек тойола, тирләтә, күңел торошо йыш үҙгәрә, йөрәк йыш тибә, күҙ тирәһе шешенә, яҡшы ашаған осраҡта лаябыҡтыра, һәр ваҡыт һыуһата, бәҙрәфкә йыш йөрөтә, сәс ҡойола. Был сир белгестәр ҡарамағында оҙайлы һәм яҡшы дауаланыуҙы талап итә.

**Ни эшләргә?** Ҡояшта ҡыҙынмағыҙ.

### Аэроотит, бароотит

Отит ауырыуын йоҡтороу өсөн күп тә кәрәкмәй, танауығыҙ еңелсә тонған йә аллергия менән яфаланған ваҡытта самолетта осоу ҙа етә. Самолет күтәрелгән һәм төшкән саҡта баҫым үҙгәреүе арҡаһында йоткылоҡ өҫтөнән урта ҡолаҡҡа инфекция инеүе бар. Тәүге симптомдары: еңелсә һаңғыраулата, ҡолаҡ сәнсә, шаулай. Былдай сәйәхәт алдынан танауығыҙға ҡан тамырын тарайтыусы дарыу тамыҙығыҙ (галазолин, санорин, нафтизин). Бароотит һыуға сума белмәүселәрҙә йә һалҡын тейеүҙән тулыһынса йүнәлеп бөтмәй һыу инеүселәрҙә була.

**Ни эшләргә?** Һыуға сумған саҡта йотҡан кеүек хәрәкәт эшләгеҙ, ярға сыҡҡас, ҡолағығыҙға ингән һыуҙы сығарығыҙ. Әгәр ҙә һеҙ ҡатмарлы отит менән яфаланаһығыҙ икән, һыуға төшөр алдынан ҡолағығыҙға майланған мамыҡ тығығыҙ.

**(Дауамы бар).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| июнь (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (1) дүшәмбе | 2:44 | 3:14 | 23:10 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 7 (2) шишәмбе | 2:44 | 3:14 | 4:43 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 8 (3) шаршамбы | 2:43 | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 9 (4) кесе йома | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (5) йома | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:19 | 20:49 | 23:19 |
| 11 (6) шәмбе | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 12 (7) йәкшәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерле апайым

**Фәннүр Миңнехәт ҡыҙы СОЛТАНҒОЛОВАНЫ**

күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

Сәскәле-гөллө, салт ҡояшлы июнь айында тыуған кешеләр һирәк - шуғалырмы, апайым кеүектәр ҙә һирәк был донъяла, ул берәү генә: изгелекле, үҙе донъяға килгән ана шул йәйҙең ҡояшы һымаҡ алсаҡ, йомарт күңелле. Һәм аҡыллы. Ун бала араһында иң өлкәне булараҡ, тормош һуҡмағына тәүләп ул баҫты, ҡустыларынан алда салғы, һәнәк тотто, һеңлеләренән алда иңенә көйәнтә һалды; донъябыҙҙың ел-ямғыр мәлдәрендә ышыҡ та беҙгә ул булды, күңелебеҙҙе йылытҡан усаҡ та беҙгә ул булды. Ул эргәбеҙҙә булғанға, беҙгә йылыраҡ та, тынысыраҡ та, күңеллерәк тә ине. Әле лә апайыбыҙ башлап бара тормош юлынан. Башлап барыусыға бер ваҡытта ла еңел булмаған. Уға ҡарап, сабырлыҡҡа күнергә, әҙәм йәнлерәк булырға, иманға килергә өйрәнәбеҙ. Апайыбыҙ хәҙер беҙгә әсәйебеҙ наҙын, тыуған йортобоҙ йылыһын да һаҡлаусы булып ҡалды. Икеләтә, өсләтә хәстәр иңенә төшкәндә лә уның бер тапҡыр ҙа "уф!" тигәнен ишеткәнебеҙ юҡ - рәхмәт һиңә, апайым! Башлап барыусы булһаң да, үҙеңә лә бик-бик терәк кәрәк юлдарында. Туғандарыңдың, уларҙан алда нисәмә йыл бер ҡыйыҡ аҫтында ғүмер иткән тормош юлдашыңдың, улдарыңдың, ҡыҙҙарыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең һиңә ышаныслы, ныҡлы терәк-таяныс булыуҙарын теләйем. Сәләмәтлек, күңел тыныслығы һиңә; бәхеттә-бәрәкәттә, һәр дайым Аллаһы Тәғәлә рәхмәтендә йөҙ йәшә, апай!

**Өфө ҡалаһынан Фәүзиә һеңлең менән Гөлфиә ҡыҙың ИҘЕЛБАЕВА- МӨХӘМӘТШИНАЛАР.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# КҮҢЕЛ БАЙРАМЫ БУЛДЫ БЫЛ!



**27 майҙа "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә "Ҡурай-фест" ҡурай байрамы үтте. Салауат Юлаев майҙанындағы тәбиғи амфитеатрҙа йәйелдерелгән күркәм тамашала ул көндө киске сәғәт 7-нән төн уртаһына тиклем ҡурай моңо өҙөлмәне. Фестивалде ҡарарға 10 меңләп кеше килгән тинеләр.**

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был көндө ҡурай оркестрҙағы бихисап музыка ҡоралдары менән бер рәттән сығыш яһап, үҙенең юғары сәнғәт өлгөһө булыуын, сикһеҙ мөмкинлектәргә эйә икәнен раҫланы. Ҡурайсы егеттәребеҙ башҡорт ҡурайының ошо мөмкинлеген, дәрәжәһен күтәреп, халҡыбыҙ көйҙәрен генә түгел, сит милләт музыкаһын да уйнап ишеттерҙе, төрлө мәҙәниәттәрҙе ҡулға-ҡул тотондороп, тәбиғи амфитеатр яланы буйлап сәфәргә сығарҙы. Ул моң ошонда килгән һәр кемдең күңеленә үҙенсә юл ярҙы, үҙенсә ишек шаҡыны. Башлыса, оҡшаттылар. Төрлө милләт кешеләренең һәр сығыштан һуң ҡайнар алҡышлауы, берәүҙең дә амфитеатрҙы ташлап китмәүе шул хаҡта һөйләй. Бәлки, улар концерт финалына сығасаҡ виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашевты һәм уның "Ҡурайсы" ансамбле сығышын көткәндер? Булыуы бик мөмкин. Сөнки уны беләләр, таныйҙар, баһалайҙар. Ә Роберт ағай өмөттәрҙе аҡланы. Уның сығышы ҡурай моңон бөтөнләй аңламаған кешене лә тетрәндерерлек, күккә күтәрерлек булды. Афарин, Роберт ағай, мең йәшә! Фекерҙәребеҙҙе байрамды тамаша ҡылғандарҙың бер нисәүһе дауам итә:

**Фидаил Уразаҡов, Өфө ҡалаһы:** Был фестивалгә ғаиләбеҙ менән килдек. Халҡыбыҙҙың ошондай мәҙәни сараларының бөтөнөһөнә лә йөрөп өлгөрөргә тырышабыҙ. Сәнғәт солғанышында йәшәйбеҙ. Ҡурай моңона үлеп ғашиҡбыҙ. Ошондай байрамдарҙа халҡыбыҙҙың мәҙәни кимәлен күреп була. Әле бик һөйөнөп йөрөйөм: үҫәбеҙ, тим! Әлеге тамаша халыҡ-ара кимәлдәге башҡа концерттарҙан, фестивалдәрҙән бер ҙә кәм түгел! Мин үҙем Өфөлә уҡыным, бында бик күп ижади кешеләрҙе беләм. Үҙемде ижади мөхиткә яҡын кешеләр рәтенә индерә алам. Һөнәрем буйынса рәссаммын. Дөрөҫөрәге, рәссам булараҡ, түл йыям. Халҡыбыҙҙың ошондай күркәм сараларында күңел-ҡаҙнама моң тултырам. Күңелендә моң булмай тороп, ижадсы булып булмай бит ул: һынлы сәнғәттә лә, музыка сәнғәтендә лә, һүҙ сәнғәтендә лә.

**Урал Ишбирҙин, Өфө ҡалаһы:** Оҫта ҡулында ҡурай кеше менән йыһанды берләштерә торған үткәргескә әйләнә. Беҙҙең ҡурайсылар araһында ошо кимәлгә еткәндәр бар, шул ҡыуандыра. Роберт Юлдашев, мәҫәлән. Ул ҡайһы урында тороп ҡурай уйнай башламаһын, янына мотлаҡ халыҡ йыйылып китәсәк, иманым камил. Сит илдә булһынмы, беҙҙең илдәме - айырма юҡ... Әле бына бер тамашасы билендәге ҡурайын алып, беҙгә һыҙҙырып күрһәтте. Әгәр ул Роберт һымаҡ аһәңләнеп, әҫәрләнеп, бөтөн йөрәген ҡушып уйнап ебәрһә, бар ғәм уның тирәләй йыйылып китер ҙә, тағы уйнауын һорарҙар ине. Ләкин ҡурайсылыҡ һәләте уйнаусының үҙенең генә йөрәген дөрләтеп, тоҡандырып ебәрергә етә икән, был да бик шәп!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нимә ул ҡурай, тигәндә, беҙ уны башҡорт халҡының музыка ҡоралы, тип күҙ алдына килтерәбеҙ. Шулай ҙа, төптән уйлап ҡараһаң, тарихты иҫкә төшөрһәң, уның билдәләнеше, ҡулланылышы тағы ла етдиерәк: ҡурай ул - күңел теле. Тел менән әйтеп, һүҙ менән аңлатып булмаған саҡтарҙа ир-аттар ҡурай менән үҙ уйын белдергән, күңел һыҙланыуын баҫҡан. Әлеге сарала ҡурайҙың үҙенсәлектәре, мөмкинлектәре бер аҙ асыҡлана төшһә лә, уның ысын урынын, тәғәйенләнешен асыҡларға кәрәктер әле. Бәлки, беҙҙең быуын да уны асыҡлап та өлгөрмәҫ. Балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ дауам итер был эште. Һәр хәлдә, минең өсөн ҡурай музыка ҡоралы ғына түгел...**

**Ҡурай байрамын**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**күҙәтте.**

һҮҘЛЕК

## БЫЛ ҮЛӘНДЕН АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Оҙон бөтнөк** - мята длиннолистная
**Оҙон әшәлсә** - ятрышник
**Оҙонса күрән** - осока удлиненная
**Оҫҡон йыуаһы** - лук косой
**Өйкөс ҡыңғырау сәскә** - колокольчик скученный
**Өркә, өркүлән** - душистый колосок
**Өрөк** - абрикос
**Өс һеркәсле тал** - ива трехтычинковая
**Пеларгония гөлө** - пеларгония
**Персик, шәфтәле** - персик
**Петрушка үләне** - петрушка
**Петуния гөлө** - петуния
**Пион гөлө** - пион
**Пәрей гөлө** - колдунова трава
**Саған** - клен
**Самшит ағасы** - самшит
**Себер тарбағайы** - скерда сибирская
**Себер шыршыһы** - ель сибирская
**Себен ҡыуағы, спаржа** - спаржа
**Селек** - карагана кустарниковидная
**Сибәр һарыгүҙ** - золототысячник красивый
**Сибәр күҙлут** - пикульник красивый
**Сиверс әреме** - полынь Сиверса
**Сирень** - сирень обыкновенная
**Сөгөлдөр** - свекла
**Сөйәл үләне** - чистотел большой
**Сүл үләне** - осока песчаная
**Сыбар күрән** - осока пузырчатая
**Сыбар сысҡанборос** - вязель разноцветный
**Сыйырсыҡ күҙе** - незабудка болотная
**Сылт-сылт сәскә** - василистник вонючий
**Сырмалсыҡ** - вьюнок

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АБАЙЛАМАЙ ҺӨЙЛӘГӘН...

### ауырымай үлгән

Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ; әсәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Еңә алмаҫтай кешене үҙең менән көрәшергә саҡырма.

**(Атилла).**

Алланан тормошондо еңеләйтеүҙе һорама, ә һине көслө итеүен һора.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Әгәр баланың шаянлығын баҫаһың икән, унан аҡыл эйәһе тәрбиәләй алмаясаҡһың.

**(Жан-Жак Руссо).**

Ахмаҡтар ғына үҙ хаталарында өйрәнә. Үҙ тәжрибәһен һанламағандар ысынлап та бөйөк.

**(Томас Фуллер).**

Алла бөйөк кешенең мәхрүмлек менән көрәшкәнен күҙәтергә ярата.

**(Роберт Бартон).**

Һәр кем үҙ фекерен әйтә ала, ләкин закон барыһы өсөн дә берәү.

**(Теренций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Шулай бер батша урман буйлап йөрөп ятһа, ҡаршыһына бер ҡарт осраған. Һөйләшеп киткәндәр. Һөйләшә торғас, батша был ҡарттың оло аҡыл эйәһе икәнен аңлап ҡалған. Шуға ла ул ҡартты бүләкләргә булған һәм был турала уның үҙенә әйткән. "Был урманда миңә кәрәк булғандың барыһы ла бар: ашарға ла, эсергә лә бар, көндөҙгө эҫелә ағастар үҙенең күләгәһенә һыйындыра, төнөн мәмерйә йоҡлар урын бирә. Шулай булғас, ниңә кәрәк миңә һинең бүләгең?" - тип, батшаның тәҡдименән баш тартҡан ҡарт. Ләкин батша ныҡышыуын белгән. "Әйҙә инде минең һарайыма, - тигән ул ҡартҡа. - Шунда минән бүләк алырһың һәм был минең күңелемде күтәрер..." Ҡарт батшаның өгөтләүенә ҡаршы тора алмаған, һарайға барырға ризалашҡан. Бына улар ҙур һарайға барып ингән. Батша шунда уҡ тубыҡланып, Аллаға доғаларын һәм теләктәрен яуҙыра башлаған: "Аллам, миңә тағы ла байлыҡ бүләк ит, минең биләмәләремде киңәйт, ҡеүәт һәм һаулыҡ бир..." Батшаның доғаларын тыңлап торған да ҡарт, иплəп кенә һарайҙан сығыу яғына йүнәлгән. Быны шәйләп ҡалған батша: "Ҡайҙа киттең? Һин бит әле минең бүләгемде алманың..." - тип ҡысҡырған. Ҡарт башын бороп: "Ә мин теләнселәрҙән бер нимә лә алмайым. Һин бит үҙең дә Алланан теләнселәйһең. Шулай булғас, һин миңә нимә бирә алаһың инде!"- тигән дә юлын дауам иткән".**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4927
Заказ 975/06